✓ *Әгәр ҙә һин тиҙ һәм насар эшләһәң, һинең тиҙ эшләүеңде оноторҙар, ә насар эшләүең оҙаҡҡа хәтерҙә ҡалыр. Әгәр ҙә һин эште аҡрын һәм яҡшы башҡарһаң, һинең аҡрын эшләүеңде оноторҙар, ә яҡшы эшеңде оҙаҡ ваҡыт хәтерҙә ҡалдырырҙар.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1945 2010

8 - 14 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru    2002 йылдан башлап сыға    Һатыуҙа хаҡы ирекле    №19 (385)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Йөрәк төпкөлөндә...**

Тыуған ил яраһы



5

**Туған телгә өйрәнмәйҙәр,**

туған тел бит асылыбыҙ нигеҙе



6-7

**Ғәфү ит, кәләшем...**



һиңә тигән селтәрҙе ризыҡҡа алмаштырҙыҡ

8-9

**"Урал моңо"нда...**

Башҡортостанды кем танытыр?



15

14 **ТВ-программа**


Рәшит НИҒМӘТИ

# ҮЛТЕР, УЛЫМ, ФАШИСТЫ!

**(Поэманан өҙөк)**

Һыуһағандың теләгәне һыу була, ти,
Аҙашҡандың эҙләгәне юл була, ти.
Яу килгәндә ялман һымаҡ боҫоп ятһа,
Ир-егеттең үлгәне тап шул була, ти.
Бел: дошмандың ауыҙ-мороно ҡанда булыр,
Күҙ - сағараҡ, ҡаҡса йөҙө ҡара булыр,
Ер ҡыртышлап, вата-емерә бара булыр, -
Шул дошманды ҡырмайынса ҡайтма, улым.
Дошман килһә, ерҙәреңде тартып алыр,
Тауҙарыңа, һыуҙарыңа бығау һалыр,
Илең бөтөр, иркең бөтөр, ниең ҡалыр? -
Шул дошманды ҡырмайынса ҡайтма, улым.
Һемәйтер ул һикһәндәге ҡарт атаңды,
Бил бөктөрөп, ҡол яһар ул ҡарт әсәңде,
Телен ҡырҡып, һүҙһеҙ итер бар сәсәнде, -
Шул дошманды ҡырмайынса ҡайтма, улым.
Кәләшеңде мыҫҡыл итер сырылдатып,
Бәпесеңде утҡа атыр сыйылдатып,
Ҡош-ҡортоңдо ҡурҙаҡ итер шыжылдатып, -
Шул дошманды ҡырмайынса ҡайтма, улым.
Әгәр дошман, ҡошҡа әйләнеп, осһа күккә,
Болоттарҙың аръяғына осоп үтһә,
Бел: урын юҡ кәбәхәткә беҙҙең күктә, -
Ыласын булып, тибеп төшөр, батыр улым!
Әгәр дошман, балыҡ булып, һыуға сумһа,
Йәнен аяп, тын да алмай ятһа шунда,
Бел: урын юҡ хәшәрәткә беҙҙең һыуҙа, -
Суртан булып, дөрөп сығар, батыр улым!
Әгәр дошман, төлкө булып, өңгә инһә,
Ҡойроҡ болғап, аяғыңа уралдиһә,
Бел: дошманды ҡыҙғаныу юҡ һис күңелдә, -
Һунарсылай йәнен ҡый һин, батыр улым!
Әгәр яуҙа ҡалтыранһа һинең ҡулың,
Ҡылысың һынһа, ҡурҡыуыңдан яҙа һуғып,
Бел: күкрәгем һиңә нәфрәт менән тулыр, -
Ҡайтма кире, һин түгелһең минең улым!
Арғымаҡтар ҡапыл үрә ҡарғып,
Арт аяҡҡа баҫып торҙолар.
Урал ҡоросоноң ҡылыстары
Ялтыраны ҡояш нурында.
Һалҡын ҡылыстарҙың йөҙөн үбеп,
Уралға ант бирҙе батырҙар:
Йә Гастелло кеүек йән бирергә,
Йә дошманды еңеп ҡайтырға!
...Полктар китте.
Урал ҡарап ҡалды,
Оҙатып ҡалды Урал улдарын.
- Еңеп ҡайтығыҙ! - тип шауланы һәм
Ҡул болғаны Урал урманы.



“Һуғышҡа инер алдынан” Н. Шакиров, Р. Искәндәров.



Бөйөк Ватан һуғышында Башҡортостандан 700 меңдән ашыу кеше ҡатнаша, уларҙың һәр өсөнсөһө яуҙа батырҙарса һәләк була. 200 мең һалдат һәм офицер орден-миҙалдар менән бүләкләнә, 300-ҙән ашыуы Советтар Союзы Геройы һәм тулы Дан ордены кавалеры исеменә лайыҡ була. Әлеге ваҡытта республика территорияһында 12370 һуғыш ветераны, шул иҫәптән 3698 һуғыш инвалиды, 8135 һуғышта ҡатнашыусы, 287 фашист концлагерҙары тотҡоно, 250 "Блокадалы Ленинградта йәшәүсе" билдәһе менән бүләкләнеүсе йәшәй. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы һәм вафат булыусыларҙың ғаилә ағзалары - 32 мең, һуғыш йылдарында тылда эшләүселәрҙең һаны 79 меңдән ашыу.

ЙӨН ӘРНЕҮЕ

# БӘХЕТТЕ СИТТӘ ТҮГЕЛ, үҙ ереңдә тап!

**Апрель аҙағында "Юлдаш" радиоһы аша Америкала йәшәүсе Айһылыу Кәримова тигән ҡарендәш менән әңгәмә ҡоролдо. Әммә әңгәмәнең маҡсаты аңлашылманы. Илһөйәрлек тойғоһон юғалтыусылардан байраҡ яһаумы, сит илдә йәшәүҙе маҡтатып, йәштәр күңеленә ҡотҡо һалыумы?**

Эйе, был һеңлекәш бар республикаға ишеттереп сит илдәге йәшәү рәүешен маҡтаны. Радио тыңлаусыларҙың: "Ни өсөн ситкә сығып киттең?" - тигән һорауына: "Бәхетле булғым килә, миңә аҡса ла кәрәкмәй, миңә бәхет кенә кәрәк, шуны ғына теләйем ",- тип яуап бирҙе. Сит илгә аҡса артынан, матди байлыҡҡа ҡыҙығып та сығып китмәгәс, бәхетте ниҙә күрә икән һуң ул? Был һорау яуапһыҙ ҡалды. Алып барыусы журналист тура телефондан бирелгән бындай һорауҙарҙы шымартып ебәрҙе, ә әңгәмәсеһенең яуаптарын һәр саҡ хуплап-йөпләп торҙо, хатта испан егеттәренең матур булыуы тураһында йыр ҙа башҡарҙылар. Унының нимәгә кәрәк булды икән? Йәштәрҙән: "Сит илгә сығыуы ауырмы?" - тигән һорауына ентекләп, тәфсирләп тороп сит илгә сығыу юлдарын өйрәтте әңгәмәсе һеңлекәш.

Бөгөнгә көндә йәштәребеҙ халҡыбыҙҙың һанын ишәйтеү юлдарын, киләсәк быуынды саф, һутлы туған телгә өйрәтеү мәсьәләләре буйынса баш ватҡан бер мәлдә "Юлдаш" радиоһының бәхет эҙләп сит илгә олаҡҡан бәндәләрҙе байраҡ итеп күрһәтеүе аңлашылманы. Әлбиттә, һеңлекәш башҡортса арыу һөйләште. Күрһәң, ата-әсәһе патриот булып, балаларын туған телгә өйрәткәндәр. Әммә унда илһөйәрлек тойғоһо ғына аҡһай булып сыҡты.

Ғөмүмән, радио һәм телевидение тапшырыуҙарында интернациональ ғаиләләр, сит илдәргә сығып китеүселәр тураһында йыш ҡына телгә алына. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек барғанда был сығыштар тағы йышайҙы. Был нимә, әле аҡыл ултырып та етмәгән үҫмерҙәрҙе, йәштәрҙе бәхет эҙләп сит илгә сығыуға ҡотортоу буламы инде был? Тыуған республикаһында йәшәп, халҡына хеҙмәт иткәндәр өлгө итеп телгә алынырға хаҡлы түгел, тип раҫламаҡсымы ҡайһы бер журналистар? Ә ниңә, мәсәлән, ҡаланан ҡайтып, ауыл егетенә кейәүгә сығып, бынамын итеп донъя көткән, милләтенә балалар үҫтергән ҡыҙҙар тураһында тапшырыуҙар юҡ?

Сит илгә бәхет эҙләп китеүселәргә лә фекеремде әйтәйем әле: ихтыярһыҙҙан сит илдәрҙә йәшәргә мәжбүр булған бөйөк Зәки Вәлиди "Халҡым" тип янып йәшәгән, эшләгән. Уның исеме данға күмелеп ҡайтты. Ә һеҙҙең бит, Италияла, Германияла, Испанияла, Украинала, башҡа тарафтарҙа йәшәп, сит милләткә балалар үҫтергән ҡарендәштәр, һөйәктәрегеҙҙең ҡайҙа сереп ятҡанын да белеүсе булмаясаҡ.

**Сабира ҮЛМӘҪБАЕВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

**Быйылдан Берҙәм дәүләт имтихандары барышында булған тәртип боҙоуҙар өсөн уҡыусыларға, уҡытыусыларға һәм БДИ барған мәктәп директорҙарына ла штраф һалынасаҡ. БР Мәғариф министрлығы янындағы Мәғариф өлкәһендә контроль һәм күҙәтеү буйынса идаралыҡ етәксеһе Илгиз Ҡәҙерголов әйтеүенсә, был мәғариф өлкәһендәге административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы РФ Кодексына индерелгән төҙәтеүҙәрҙең үҙ көсөнә инеүе менән бәйле.**

# ЕҢЕЛГӘ ӨМӨТ ИТМӘ...

Әйтәйек, БДИ тапшырған ваҡытта уҡыусыла шпаргалка йәки кеҫә телефоны табылһа, уның ата-әсәһенә өс меңдән биш меңгә тиклем штраф түләргә тура киләсәк. Аудиторияға кеҫә телефонын индерергә маташыу ҙа хоҡуҡ боҙоу тип иҫәпләнә. Уҡытыусы БДИ тапшырған уҡыусыға ярҙам итһә, мәсьәлә сисешһә, мобиль бәйләнеш, электрон-иҫәпләү техникаһы, белешмә материалдар менән ҡулланырға рөхсәт итһә, 20 меңдән 40 меңгә тиклем штраф түләйәсәк. Бындай осраҡта урында уҡ административ хоҡуҡ боҙоу тураһында протокол төҙәлә һәм судҡа тапшырыла. Имтихан башланғанға тиклем имтихан материалдарын һаҡлау шарттарын боҙоу, имтихан башланғанға тиклем махсус пакетты асыу, имтихан барышында аудиториянан имтихан материалдарын алып сығыу өсөн дә ошондай уҡ күләмдә штраф ҡаралған.

Әйткәндәй, БР Мәғариф министрлығында БДИ буйынса "ҡыҙыу бәйләнеш" эшләй. (347) 273-20-87 телефоны аша шылтыратып, үҙегеҙҙе ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап алырға була. Бынан тыш, Алина Кабаева патронаты аҫтында БДИ буйынса ҡыҙыу бәйләнеш тә үҙ эшен башланы. Был проект Рособрнадзор ярҙамында тормошҡа ашырыла. БДИ тапшырыласаҡ фәндәр һәм имтихан үткәрелеү шарттары буйынса консультациялар ege@kabaewa-alina.ru электрон почтаһы аша 14 июнгә тиклем үткәрелә. Телефон аша консультацияны 20 майҙан 8-800-505-12-05 телефоны аша алып буласаҡ.

Сығарылыш уҡыусыларының БДИ-ға әҙерлектең интернет-системаһын ҡулланыу мөмкинлеге лә бар. Бының өсөн www.ege.edu.ru федераль интернет-порталында уҡыу һәм белешмә материалы, мәсьәләләр, тестар урынлаштырылған.

Башҡортостанда БДИ-ға әҙерлек буйынса кәрәкле мәғлүмәтте www.rcoirb.narod.ru сайтында табырға була.

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Дүртөйлө районы башҡорт теле уҡытыусылары.

**Яҙғы, йәйге мәшәҡәттәр башланмаҫ борон, бөгөн-иртәгә 2010 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып ҡалығыҙ, тип саҡырабыҙ һеҙҙе. Яңы хаҡтарҙы иғлан итәбеҙ: 50665 индекслы "Киске Өфө" алты айға 318 һум 24 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 354 һум 24 тин тора.**

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы дауам итә.**

Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрәр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр.

**Тағы бер тәҡдим бар...**

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә бүлһа ла шатлыҡ кисерә.

**Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:**

- Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә "Өфө-матбуғат" киоскыһында яҙылыу һеҙгә бик арзанға төшәсәк, ярты йылға 240 һум.
- Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа унайлы һәм арзанырак: ярты йылға - 225 һум.

**Өфөләләргә әйтер тағы бер һүҙ...**

**"Гәзиткә яҙылырға аҡсам юҡ", "Почта бүлексәһенә инергә ваҡыт юҡ", "Подъездыбыҙҙа почта йәшниге юҡ", - тигән ваҡ һылтаныуҙарҙы ситкә ташлайыҡсы әле. Баҫмабыҙ тиражы аша үҙебеҙҙең баш ҡала барлығыбыҙҙы, ҡеүәтебеҙҙе, берҙәмлекте, татыулыкты күрһәтәйек, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ!" - тигән күмәк тауышыбыҙҙы ишеттерәйек, гәзиз милләттәштәр!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын һәм инвалидтарын, тыл хеҙмәтсәндәрен Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығы менән ҡотланы.

✓Күмертау дауаханаһы базаһында гемодиализ бүлеге асылды. Бүлекте асыу тантанаһында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев ҡатнашты.

✓Башҡортостан делегацияһы Эстонияның Палдиски ҡалаһында (элекке Рогервик) булды һәм бындағы "Ағиҙел" башҡорт ойошмаһы ойошторолоуға ун йыл тулыу айҡанлы үткән сараларҙа ҡатнашты.

✓Май байрамдары алдынан "Федераль пассажирҙар компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте 121 өҫтәмә пассажирҙар поезы булдырған. Украинаға 30 рейс буйынса - 17, Белоруссияға 8 рейста 8 поезд йөрөйәсәк. "Өфө- Мәскәү" маршруты буйынса ла ике өҫтәмә поезд булдырылған.

✓12 майға тиклем Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм уларға тиңләштерелгән кешеләр Өфө ҡала транспортында бушлай йөрөй ала.

✓10 майға тиклем республикала "Полкташҡа шылтыратыу" акцияһы үткәрелә. Йәғни һуғыш ветерандары Рәсәйҙең һәм БДБ илдәренең һәр төбәгенә бушлай шылтырата ала.

✓Башҡорт дәүләт университетында "Деканға һорау бир" акцияһы башланды. Сара сиктәрендә мәктәп уҡыусылары, буласаҡ абитуриенттар, студенттар һәм уларҙың ата-әсәләре юғары уҡыу йортоноң бөтә факультеттары декандарына һорау бирә ала. Һорауҙар менән һәр кесе йомала 14-16 сәғәттәрҙә мөрәжәғәт итеп була. Ҡабул итеү комиссияһы телефоны - 273-67-08.

✓"Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында Бөйөк Еңеүгә арнап патриотик йырҙар башҡарыусыларҙың "Виват, еңеү!" концерты булып үтте, сарала Башҡортостан "Китап" нәшриәте һуғыш ветерандарына 270 комплект китаптар бүләк итте.

✓Байрамдың үҙәк сараһы - Еңеү параты Мәскәүҙә, Ҡыҙыл майҙанда һәм РФ субъекттарында үтә. Өфөлә Еңеү параты 9 май көнө Ленин исемендәге майҙанда 12.00 сәғәттә башлана. Парадта 40 берәмек техника, шул иҫәптән хәрби йылдар техникаһы ла буласаҡ.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# БӨЙӨК ЕҢЕҮ - БӨЙӨК ХАЛЫҠТЫҢ ТАНТАНАҺЫ ҺӘМ...

## иҫәбе билдәле булмаған ҡорбандарҙы иҫкә алыу көнө лә



**Илебеҙҙә оло байрам. 9 май - Еңеү көнө. Был байрамға әҙерлек алдан уҡ башланды. Уға айырыуса тантаналы төҫ бирелә. Сөнки юбилей. Йәғни түңәрәк дата. Еңеүгә 65 йыл тула. Һуғыш тамамланғанда егерме йәшен тултырған һалдаттарға - 85 йәш. Бик күптәр был көнгә тиклем килеп етмәне. Һуғыш ҡырҙарында ятып ҡалғандар, госпиталдәрҙә ауыр яраларҙан вафат булғандар, фашист лагерҙарында ҡырылғандар, тотош ауылдары менән яндырылған, ағыуланған ҡорбандар бихисап. Миллионлаған.**

Иосиф Виссарионович Сталин иҫәбе буйынса Бөйөк Ватан һуғышында Советтар Союзынан 7 миллион самаһы кеше һәләк булған. Уға шулайыраҡ тойолған. Никита Сергеевич Хрущев осоронда иһә ҡорбандар һаны 20 миллионға тиклем еткерелгән. Ошо һан менән оҙаҡ ҡына йәшәнек. Егерме кешене күргән бар. Егерме миллионды күҙ алдына ла килтереп булмай. Бөгөнгө Өфө кеүек егерме ҡала тигән һүҙ бит был. Ә Рәсәйҙә бөгөн Өфө кеүек унун бер генә "миллионер" ҡала бар.

Үткән быуаттың 90-сы йылдар башында Еңеүҙең 45 йыллыҡ юбилейын билдәләгән ваҡытта илебеҙҙең Бөйөк Ватан һуғышындағы халыҡ юғалтыуҙары 27 миллионға баһаланды. Ә бит фронтта һәм тылда, әсирҙә һәләк булғандарҙан тыумай ҡалған балаларҙы, уларҙың балаларын иҫәпкә бәрәү ҙә алмай ҙа баһа! Хәйер, уларҙы иҫәпкә алырлыҡ та түгелдер инде.

Беҙҙең илдә һәр ваҡыт иң арзаны кеше ғүмере булды. Совет заманының үҙенсәлектәренә генә һылтанып булмай. Батшалар ҙа үҙ халҡын бер ҙә кешегә һанаманы - төрлө ысулдар менән аяуһыҙ ҡырҙы ла ҡырҙы. Ә революциянан һуң инде кешеләрҙе юҡ итеү даими рәүештә барҙы. Граждандар һуғышынан алып Чечня һуғышына тиклем дәүләтебеҙ булған проблемаларҙы кеше иҫәбенә хәл итте. Дошмандың пулеметын баҫҡан Шәкирйән Мөхәмәтйәнов (Александр Матросов), самолетын фашистарҙың танк колоннаһына йүнәлткән Гастелло... Ат менән һыбайлап немецтың ҡеүәтле танкыларына ҡаршы күтәрелгән башҡорттар... Танкыларға ҡаршы һуңғы граната менән сыҡҡандар, артиллерия утын үҙенә йүнәлткәндәр - бына беҙҙең иң оло геройҙарыбыҙ. Ундайҙар күп булды инде. Совет кешеһе бик оҙаҡ йылдар буйына коммунистик йәмғиәт төҙөү өсөн сеймал ғына булып килде. Кеше ғүмеренең иң оло байлыҡ икәнен әле һаман булһа ла аңлап етмәйбеҙ. Дәүләтебеҙ халыҡты туҡтауһыҙ ағып торған шишмә кеүек күрҙе һәм күрә, шикелле. Күпме һыу алһаң да, муллап сарыф итһәң дә, түкһәң-сәсһәң дә, ул бөтмәй һымаҡ. Бөтә икән шул.

Еңеү темаһынан ситкәрәк китәйек. Ни өсөн Польша халҡы 21 меңдән ашыу поляк үлтерелгән Катынь фажиғәһен 65 йыл дауамында иҫендә тотоп, уға даими рәүештә асыҡлыҡ индерергә тырышты икән, тип уйлағанығыҙ юҡмы? Сөнки улар күп түгел. Донъяла бөтәһе 55 миллионға яҡын поляк йәшәй, шуларҙың 38 миллионы - Польшала. Улар өсөн һәр бер кеше ҡиммәт. Һәр бер кеше ҡәҙерле.

1940 йылдың яҙында Смоленск өлкәһенең Катынь ауылы эргәһендә НКВД-ның ҡарары менән "Лагерҙарҙы бушатыу операцияһы" сиктәрендә әсиргә алынған поляк офицерҙары күпләп атып үлтерелә. Әйтеп үтергә кәрәк, ошо уҡ ваҡытта фашистик Германияла ла ошондай уҡ акция үткәрелә. Гитлер, бер илдә ике әфәнде булмай, поляк дворяндары юҡ ителергә тейеш, тип белдерә. Һәм һүҙҙәрен шунда уҡ тормошҡа ашырып ҡуя.

Беҙҙең илдә иһә кеше Бөйөк Ватан һуғышына тиклем үк "лагерь саңына" әүерелдерелгәйне. Һуғыш башланғас иһә кеше ғүмеренең бәҫе бөтөнләй китте. "Война все спишет", йә "Һуғыш барыһын да ғәфү итә" - 1941-1945 йылдарҙа киң таралған әйтем был. Тереләргә генә түгел, үлгәндәргә лә ошондай уҡ мөнәсәбәт булды. 65 йыл буйына ерҙә ятыуҙарына ҡарамаҫтан, йолаларға, ғөрөф-ғәҙәттәргә ярашлы ерләнмәгәндәрҙең һанын бәрәү ҙә белмәй. Билдәһеҙ һалдат - Совет пропагандаһының тағы ла бер әләме. Исеме билдәһеҙ, ә ҡаһарманлығы - мәңгелек. Һуғыш йылдарында һәм унан һуң ябай кешегә булған мөнәсәбәттән генә килә был. Әле һаман булһа ла тапшырылмаған наградалар хужаларын эҙләп таба. Йәки тапмай, сөнки уларҙың йәне күптән инде гүрҙә. Әле һаман булһа ла эҙәрмәндәр һуғыш ҡырҙарынан яугирҙәрҙең ҡалдыҡтарын таба һәм тыуған ерҙәренә алып ҡайтып ерләй. Һалдаттың исеме дәүләткә кәрәкмәй. Дәүләткә уның батырлығы ғына мотлаҡ. Кеше - винтик. Кеше - ҡорал. Японияла Икенсе бөтә донъя һуғышы барышында камикадзеларҙы - император хаҡына һәләк булырға әҙер махсус кешеләрҙе тәрбиәләйҙәр. Улар самолеттарҙа Америка Ҡушма Штаттарының хәрби-диңгеҙ флоты караптарына һөжүм итә. Уларҙың исем-шәрифтәре билдәлеме икән?

Президент Дмитрий Анатольевич Медведевтың байрам алды интервьюһын уҡыйым. Президент вазифаһын ҡабул итеп алғас, беренсе ҡарарым ветерандарҙы фатир менән тәьмин итеү тураһында булды, тип белдерә ул. Дөрөҫ. Шулай булғас, ни эшләп ике йыл ваҡыт үткәс, Рәсәйҙә айырым ветерандарға "фатирынды Президенттан һора", тип белдерәләр икән? Әллә беҙҙә власть вертикале бары тик айырым төбәктәр өсөн генә булдырыламы?

Еңеү көнөнә Совет заманында уҡ айырым идеологик төҫ бирелә торғайны. Ул хатта 9 май Бөйөк Ватан һуғышында фашистик Германияны еңеү көнө тип аталды. Бер заман "фашистик Германия" тигән һүҙбәйләнеш төшөп ҡалды. Тағы ла бер аҙҙан "Бөйөк Ватан һуғышы" һүҙҙәре лә юҡҡа сыҡмаҫмы?

Быйыл Мәскәүҙә Ҡыҙыл майҙанда Рәсәй армияһы частары менән бер рәттән, Америка Ҡушма Штаттары, Бөйөк Британия, башҡа ҡайһы бер илдәрҙең Ҡораллы көстәре вәкилдәре лә марш менән үтәсәк. Улар ҙа бит беҙҙең ил менән ҡуша фашизмға ҡаршы һуғышты. Улар ҙа был байрамға үҙ өлөшөн индергән. Быға тиклем АҠШ, Көнбайыш Европа илдәре Расәйҙең потенциаль дошманы тип һанала ине. Бәлки, ошо парадтан һуң хәлдәр яҡшыға үҙгәрер? Бәлки, Рәсәй ҡоралланыуға, яңынан-яңы караптар, самолеттар, ракеталар уйлап табыуға, һынауға һәм етештереүгә түккән аҡсаны иҡтисадыбыҙҙы үҙгәртеп ҡороуға, яңыртыуға йүнәлтер?

Һуңғы йылдарҙа Еңеү көнө алдынан уның әһәмиәтен, ғөмүмән, Советтар Союзының фашистик Германияны тар-мар итеүгә индергән өлөшөн юҡҡа сығарыу буйынса ниндәйҙер шау-шыу башлана. Балтик буйы илдәре тауыш күтәрә. Уларҙы ваҡытында Совет Армияһы фашистик Германия ғәскәрҙәренән азат итмәгән, ә, киреһенсә, баҫып алған икән. Быйыл, мәҫәлән, Молдова президенты Мәскәүгә килеүҙән баш тартҡан, имеш. Ул үҙенең илен еңеүсе тип иҫәпләмәй, күрәһең.

Ғөмүмән, Еңеү байрамы иң тәүҙә ябай халыҡҡа кәрәк. Әле ветерандар тере. Уларҙың улдары, ҡыҙҙары, ейән-ейәнсәрҙәре һуғыш тураһындағы хәтирәләрҙе тыңлап, орден-миҙалдарҙы күреп, аталары, ҡартаталары менән һоҡланып үҫкән. Ошо уҡ тойғоно балаларына тапшырырға тырыша. Һоҡланыуыбыҙҙы, ғорурлығыбыҙҙы ни тиклем оҙағыраҡ һаҡлаһаҡ, мөмкин тиклем күберәк кешегә бүләк итһәк, Бөйөк Ватан һуғышы, Бөйөк Еңеү беҙҙең күңелебеҙҙә, халыҡ хәтерендә шул тиклем оҙағыраҡ ҡаласаҡ. Ошоно онотмаһаҡ ине.

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 65 йыллығын байрам итеү сиктәрендә Башҡортостандың һуғыш ветерандары 7 майҙан алып 10 майға тиклем Мәскәү, Санкт-Петербург, Волгоград, Белгород, Курскиҙа үткән тантаналы сараларҙа ҡатнаша. Республиканың ҡала һәм районтарынан килгән 270 ветеран Өфөләге сараларҙа ҡатнаша. Улар өс көн дауамында баш ҡала санаторийында ял итеп, дауаланып та өлгөрәсәк.

✓Республикала 320 Бөйөк Ватан һуғышы инвалиды еңел автомобиль менән тәьмин ителгән. Үҙ теләге менән 90 һуғыш инвалиды бер тапҡыр түләнә торған 100 мең һум күләмендәге аҡсалата компенсация алған. 2005-2009 йылдарҙа муниципаль берләшмәләр көсө менән 332 һуғыш ветераны торлаҡлы булған. 2005 йылдан ағымдағы йылға тиклем федераль бюджет иҫәбе саралары ярҙамында 502 Бөйөк Ватан һуғышы ветераны торлаҡ менән тәьмин ителгән. 2005 йылдың 1 мартынан һуң сираҡка баҫҡан ветерандарҙың торлаҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса ла эштәр башланған.

✓БР буйынса Пенсия фонды Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға һәм инвалидтарға, концлагерь тотҡондарына, Финляндия, Бөйөк Ватан һуғышы, Япония менән һуғыштар осоронда вафат булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең тол ҡатындарына, Бөйөк Ватан һуғышы ҡатнашыусыларының тол ҡатындарына - 5 мең, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда тылда 6 айҙан кәм эшләмәгән, Бөйөк Ватан һуғышы мәлендәге хеҙмәте өсөн орден-миҙалдар менән бүләкләнеүселәр, нацист концлагерҙары, төрмә һәм гетто тотҡондарына 1 мең һум күләмендә түләүҙәрҙе тапшыра башланы. Республикала бындай граждандар һаны 125 мең кеше.

✓Баш ҡала милицияһының тәүлек әйләнәһенә эшләүсе "Ышаныс телефоны" шылтыратыуҙар ҡабул итә башланы (347)237-17-17. Һәр граждан ошо телефон буйынса милиция хеҙмәткәрҙәренең дөрөҫ булмаған ҡылығы, шулай уҡ төрлө енәйәттәр тураһында хәбәр итә ала.

✓Республикала үткән төҙөкләндереү айлығында 1300 мең квадрат метр юл ремонтланған. 46 мең ихата, йорт фасадтары йүнәтелгән, ҡала һәм ауылдарҙы йәшелләндереү эше лә әүҙем бара. Был эштә мәктәп уҡыусылары һәм йәш экологтар ҙа ҙур ярҙам күрһәтә. Апрель аҙағына 11 меңдән ашыу төп ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылған.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СИТ ИЛ ПАСПОРТЫН...

**Йәй миҙгелендә сит илгә сығып ял итеүселәр күбәйә. Былтырҙан алып сит ил паспорты алыуҙа күп кенә үҙгәрештәр булды.**

Ағымдағы йыл башында сит ил паспорты өсөн һалым күләме үҙгәрҙе. Ябай, 5 йылға бирелә торған сит ил паспорты алыу өсөн 1 мең һум, 14 йәшкә тиклемге балалар өсөн 300 һум түләргә кәрәк. Биометрик сит ил паспорты өсөн дәүләт һалымы 2,5 мең һумға тиклем артты. 14 йәшкә тиклемге балалар өсөн хәҙер 1200 һум түләргә тейеш булаһығыҙ.

1 марттан биометрик сит ил паспорты 10 йылға бирелә башланы. Уның ябай паспорттан айырмаһы шунда: уға микрочип ҡуйылған һәм паспорт хужаһы тураһындағы бар мәғлүмәт электрон рәүештә ошо микрочипта һаҡлана.

2010 йылдың 1 апреленән Рәсәй территорияһында сит ил паспорты өсөн ғаризаны электрон рәүештә, йәғни Интернет селтәре аша биреп була. Бының өсөн www.GOSUSLUGI.ru дөйөм порталына инеп, теркәү үтергә кәрәк. Һуңынан унда үҙең тураһында мәғлүмәтте (фамилия, исем, адрес, кеҫә телефоны номеры, электрон почта адресы һ.б.) яҙып, "Үҙеңдең кабинетыңды" булдырыу мотлаҡ. Ошо талаптарҙы үтәгәндән һуң, гражданиндың электрон почтаһына пароль һәм башҡа мәғлүмәттәр киләсәк. Ошо мәғлүмәттәрҙе ҡулланып, портал аша сит ил паспортына ғариза тултырырға була.

Сит илгә сыҡҡанда сиктә үткәндә ҡайһы бер ҡыйынлыҡтар килеп тыуmaһын өсөн, миграция хеҙмәте балиғ булмаған балаларға ла сит ил паспорты эшләтергә тәҡдим итә, сөнки закон буйынса балалар ҙа Рәсәй граждандары һәм уларҙың шәхесен раҫлаусы айырым документ булырға тейеш.

**Салауат ХИЛАЛОВ.**

# КӘРӘКЛЕ ҺӨНӘР

**Республикала 2003 йылға тиклем документтар менән эшләүсе белгестәр әҙерләүсе юғары уҡыу йорттары булмаған. Ошоно иҫәпкә алып, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында асылған "Идара итеүҙе документацион тәьмин итеү" бүлегендә быйыл икенсе сығарылыш студенттары диплом эшен яҡланы.**

Буласаҡ йәш белгестәрҙең диплом эше темалары республика учреждениелары, ойошмалары һәм предприятиеларының эшмәкәрлеге менән тығыҙ бәйле. Электрон документ һәм электрон документтар әйләнеше мәсьәләләре, мәғлүмәт һаҡлау һәм ялған документты билдәләү алымдары, идара итеүҙә документацион процестарҙы компьютерлаштырыу кеүек квалификациялы эштәр дәүләт аттестация комиссияһы тарафынан юғары баһаланды.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Тормошҡа етди ҡараған, киләсәгенә битараф булмаған, төплө белемгә эйә булырға ынтылған малайҙарҙы Республика башҡорт лицей-интернаты һынауҙар тоторға саҡыра.**



# БАШҠОРТ ЛИЦЕЙЫНДА...

## иң шәп егеттәр уҡый

Республика башҡорт лицей-интернатының төп үҙенсәлеге - математика, физика, информатиканы тәрәнәйтеп өйрәнеү. Уҡыусылар 7-се синыфта тел буйынса ныҡлы әҙерлек үткәндән һуң, теүәл фәндәрҙе инглиз телендә өйрәнә башлай. Лицейҙа башҡорт һәм рус телдәрен юғары кимәлдә үҙләштереүгә лә етди иғтибар бүленә.

Күп илдәр һәләтле йәштәрен алға киткән башҡа илдәргә ебәреп уҡыта. Был дөйөм глобалләшеү шарттарында заман арбаһынан төшөп ҡалмау өсөн бик мөһим. Шуға ла лицей-интернаттың төп маҡсаттарының береһе - сит илгә сығып белем алырҙай уҡыусылар әҙерләү. Бының өсөн мәғлүмәти технологияларға ҙур иғтибар бүленә, уҡыу йортонoң матди базаһы ла заман талаптарына ярашлы йылдан-йыл ныға бара.

Тик ниндәй генә кәрәкле технологиялар булмаһын, улар уҡытыусыларҙы алыштыра алмай. Лицей-интернаттың коллективы сағыштырмаса йәш булыуға ҡарамаҫтан, улар араһында бай тәжрибә туплаған, үҙ эшенең оҫтаһына әүерелгән уҡытыусылар бихисап. Быны уҡыусыларҙың район, ҡала, республика кимәлендәге олимпиадаларҙа даими призлы урындар яулауы, Рәсәй кимәлендәге олимпиадаларҙа дипломдарға лайыҡ булыуы ла дәлилләй. Физика-математика профиле, заманса мәғлүмәти технологиялар һәм һәр уҡыусыға айырым ҡараш - былар барыһы ла лицей уҡыусыларына белем алыу өлкәһендә етди уңыштарға өлгәшергә мөмкинлек бирә, ти улар.

Лицей-интернатта уҡыусылар 2-3 урынлыҡ бүлмәләрҙә йәшәй. Ятаҡтың һәр ҡатында ял итеү бүлмәһе, теннис өҫтәле лә бар, шулай уҡ медицина пункты һәм стоматология кабинеты эшләй. Мәктәп формаһы - ҡара төҫтәге классик костюм, аҡ күлдәк, галстук.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республика башҡорт лицей-интернатының 7-се синыфына уҡырға инергә теләүселәр өсөн 2010 йылдың 16 майында 11 сәғәттә бөтә республика буйынса түбәндәге ҡала һәм ауылдарҙа ҡабул итеү имтихандары үткәрелә: Өфө ҡалаһы, Кольцевая урамы, 74 (белешмә өсөн телефон: 242-18-32); Баймаҡ ҡалаһы, мәктәп-интернат; Белорет ҡалаһы, 22-се Башҡорт гимназияһы; Дәүләкән ҡалаһы, мәктәп-интернат; Учалы ҡалаһы, 12-се мәктәп; Аҡъяр ауылы, 2-се урта мәктәп; Асҡар ауылы, 2-се мәктәп; Оло Ыҡтамаҡ ауылы, 1-се лицей; Иҫәнғол ауылы, 1-се мәктәп; Малаяҙ ауылы, Башҡорт гимназияһы; Мәсәғүт ауылы, Республика лицей-интернаты; Мораҡ ауылы, Башҡорт гимназияһы; Иҫке Собханғол ауылы, урта мәктәп; Юлдыбай ауылы, урта мәктәп. Имтихандарға үҙегеҙ менән тыуыу тураһында таныҡлыҡ һәм ручка алып килеү мотлаҡ. Ҡабул итеү имтихандары математика һәм логика, рус теле йәки башҡорт теленән (теләк буйынса) тест формаһында үтә. Балдарҙы һанағанда математика һәм логика буйынса сиселгән мәсьәләләр иҫәбенә өҫтөнлөк биреләсәк.**

ҺУҒЫШТЫ КҮРАЛМАЙЫМ...

# САМОЛЕТ, АТАЙЫМДЫ ТӨШӨРӨП КИТ...



**Минең атайым Һөйөндөков Мәхмүтйән Солтан улының дүрт балаһы булғас, ҡатыны үлеп китә. Ҡайһыһы, балаларҙы етем итмәйем, тип, иң бәләкәй ҡыҙын атайыма кейәүгә бирә. Унан ағайым Фиргәт һәм мин тыуғанбыҙ.**

Өлкән ағайым әрме хеҙмәтенә киткәс, һуғыш башланып китеп, хәбәрһеҙ юғала. Атайымды ла һуғышҡа алалар. Ул саҡта ағайыма - 2, миңә өс ай булып ҡала. Ҡарт әсәһен, йәш ҡатынын, өй эсе тулы балаларҙы ҡалдырыу еңел булмағандыр атайыма. Беҙҙең Вәли ауылы (Йылайыр районы) военкомат урынлашҡан Юлдыбайҙан 3 километр алыҫлыҡта ғына ята. Атайым төндә кире ҡайтып Үтәпов Ғәбитулла менән Байсогоров Ғәйнетдин олатайҙарға барып, балаларына күҙ-колаҡ булыуҙы үтенгән. Ул бик оҫта ҡурайсы һәм йырсы булған.

Икелә генә йәштә ҡалды улым,
Урам осҡайында булыр өйөбөҙ.
Һуғыштарға китәм, ҡайталмаһам,
Атайың ҡайта ул, тип һөйөгөҙ.

Сәңгелдәктә ҡалды минең ҡыҙым,
Сәңгелдәге төшһә, алып элегеҙ.
Урамдарға сығып, илап йөрөһә,
Башҡайынан һыйпап уҙығыҙ.

Шулай тип йыр йырлап ҡалдырған ул. Беҙ "Атай" тигән һүҙҙе бер ваҡытта ла әйтә алманыҡ. Самолет осоп барғанын күрһәк: "Атайымды төшөрөп кит", - тип артынан йүгерә инек. Сәсте йоҙаҡлап ятһаң, төшкә инә ул, тип кем әйткәндер инде. Әсәй күрмәгәндә сәскә йоҙаҡ ҡуйып ята инем. Ҡыҙғаныс, исмаһам, бер тапҡыр ҙа төшкә инмәне атайым.

Шөкөр, әсәйебеҙ хәленән килгәнсе етемлек күрһәтмәне. Ул күргән михнәттәрҙең күбеһен беҙ белмәйбеҙ ҙә. Колхозда ат ҡараны. Тишек бйыма, тишек бейләй. Ямарға - ямау, тегергә еп юҡ. Бер бәләкәй сепрәк тапһам, шуны һүреп, бейәләй ямайым. Уҡыуға ла бармаған баланың ямауы ла шул тиклем генә булғандыр инде. Йәйен әсәйҙе күрмәнек тә тиерлек. Беҙ йоҡонан тормаҫ элек эшкә китә лә, беҙ йоҡларға яткас ҡына ҡайта ине.

Шунан нисек итеп һуғышты ҡәһәрләмәйһең инде. Беҙ күргәнде ҡалған быуындар күрмәһен, тип көн-төн теләйем.

**Ғилмияза БУРАНҒОЛОВА.
Баймаҡ районы
Әбделкәрим ауылы.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Элекке "Аврора" кинотеатры алдындағы майҙанда 8, 9, 10 майҙа баҡсасылар өсөн йәрминкә үтә. Унда республиканың емеш-еләк, йәшелсәселек менән шөғөлләнгән хужалыҡтары ҡатнашасаҡ. Йәрминкәлә ҡатнашырға теләүселәр өсөн бушлай һатыу урындары биреләсәк. Белешмәләр өсөн телефондар: 279-90-43; 279-06-02.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Роспотребнадзорҙың Башҡортостан идаралығы етәксеһе урынбаҫары Нәсимә Кусимованың сауҙала һатылған аҙыҡ-түлектең сифаты һәм хәүефһеҙлеге тураһындағы мәғлүмәте тыңланды. Билдәләнеүенсә, идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре тиҙ боҙола торған һөт һәм ит кеүек ризыҡтар әйләнешен айырыуса контролдә тота. Былтыр, мәҫәлән, 2156 кг сифатһыҙ ризыҡ һатыуҙан алынған. Быйыл беренсе кварталда ғына мең ярым кг аҙыҡ-түлек ҡулланыуға яраҡһыҙ тип табылған.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең "Ҡайнар пейджер" хеҙмәтенә апрель айында 229 граждан мөрәжәғәт иткән. Иң күп мөрәжәғәт - Калинин районынан. Дим районынан 2 генә кеше шылтыратҡан. Өфөләләр өсөн торлаҡ йорттарҙы ремонтлау иң актуаль тема булып ҡала. Был хаҡта 57 кеше шылтыратҡан. Йорт ҡыйыҡтарын ремонтлау ҙа борсой халыҡты. Ихаталарҙы ремонтлау һәм тәртипкә килтереү, транспорт хеҙмәте мәсьәләләре буйынса шылтыратыуҙар ҙа күп кенә. "Мэрия" абоненты адресына һорауҙарығыҙҙы 2-770-911 телефоны буйынса тапшыра алаһығыҙ.

✓9 майҙан Яҡутов исемендәге ял һәм күңел асыу паркында Өфө балалар тимер юлы аттракционы эш башлай. Былтыр тимер юлда яңыртыу эштәре башҡарылған, өс вагондың да эс яғында уңайлыҡтар артҡан.

✓Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арналған саралар араһында Советтар Союзы Геройы генерал Таһир Кусимовҡа һәм 112-се гвардия Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар командиры, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовҡа һәйкәл асыу ҙа планлаштырылған.

✓Бөрйән районында Шүлгәнташ мәмерйәһе янында этнография комплексы төҙөлә. Экспонаттарҙың күбеһе башҡорттарҙың боронғо һәм урта быуат тарихына арналасаҡ. Уны төҙөүҙә Кинйә Арыҫланов исемендәге Мәрхәмәтлек фонды әүҙем ҡатнаша.

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП

**Бөйөк Ватан һуғышы һәм суд приставтары ветераны Миңниямал Батыргәрәй ҡыҙы Үтәкәева 1924 йылда Ишембай районы Ҡанаҡай ауылында тыуған. Һигеҙенсе класты тамамлаған йылда уларҙың ғаиләһе бәхетһеҙлеккә юлыға - әсәләре үлеп китә. Кесе ҡустыларын һәм һеңлеләрен ҡарар өсөн ҡыҙға колхозда эшкә башларға тура килә. Оҙаҡ эшләп өлгөрмәй, Бөйөк Ватан һуғышы башланып китә.**



# ЙӨРӘК ТӨПКӨЛӨНДӘ...

## Тыуған ил яраһы

Яҙыусы Александр Долининдың "Утлы дуғала" китабында тарихи Курск аҫты һуғышы ваҡытында беҙҙең яҡташтарҙың батырлыҡтары (унда Миңниямал апайҙың да исеме телгә алына) тураһында бәйән ителә. "Йәш Миңниямалға француз яҙыусыһы Виктор Гюгоның "Тыуған илгә килтергән яраны беҙҙең һәр беребеҙ йөрәк төпкөлөндә тоя" тигән һүҙҙәрен уҡырға тура килде микән, белмәйем. Әммә шуны аныҡ беләм, башҡорт ҡыҙының һуғышҡа китергә, тигән ҡарары - йөрәк төпкөлөнән сыҡты".

Миңниямал Батыргәрәй ҡыҙының хәтирәләренән:

- Минең һуғыш биографиям 1943 йылдың 3 июненән башланды. Райондың хәрби комитеты миңә һәм тағы ике ауылдаш ҡыҙға һуғыш элемтәсеһе һөнәрен үҙләштерергә тәҡдим итте. Өфөлә өс айлыҡ элемтәселәр курсы ойошторолғайны, беҙ шунда уҡып алдыҡ һәм үҙем кеүек ҡыҙҙар менән вагонда фронтҡа юл алдыҡ. Барып еткәс, мине был ваҡытта Курск дуғаһында оборона тотоусы 1871-се зенит артиллерия полкына элемтәсе итеп ҡуйҙылар. Хеҙмәт итергә икенсе батареяға ебәрҙеләр. Батарея һуғыш эше менән шөғөлләнә, эре тимер юл станциялары һәм йылға аша сығыу урындарын, штабтарҙы һәм беҙҙең ғәскәрҙәр тупланған урындарҙы немец авиацияһынан ышыҡлай ине. Ләкин мин оҙаҡ хеҙмәт итеп өлгөрмәнем, 1944 йылдың мартында Белоруссияның Барановичи ҡалаһы янында уң күҙемә һәм аяғыма ярсыҡ яраһы алдым. Полктың ялан госпиталь-медсанчасында ай тирәһе дауаландым һәм тағы үҙемдең батареяға киттем. Украинала һуғыштым. Днепр йылғаһы аша һалынған ҙур күперҙе һаҡлаганыбыҙ хәтеремдә. Элемтәне тергеҙергә ебәргән саҡта һөжүм булды һәм беҙҙең күп элемтәсе ҡыҙҙар һәләк булды. Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булыусылар мәңге хәтерҙә...

Александр Долининдың "Утлы дуғала" китабынан тағы өҙөк килтерәп уҙам: "Зенитсыларға самолеттарҙан йәшенергә ҡушылмай, шуға ла тәү сиратта зенит батареялары бомбаға тотала. Көслө ир-аттар өсөн дә еңел булмаған эште башҡарып, көнө-төнө һуғыш вахтаһын ирҙәрсә алып барып өлгөргән сибек башҡорт ҡыҙына күпме батырлыҡ кәрәк булған! Ысынында был герой ҡатын үткәргестәрҙе ҡулында ышаныслы тотҡан, текст һәм асҡыстар менән асыҡ эшләй алған универсаль элемтәсе булып сыға".

- 1944 йылда Польшала, ҡаланың исемен хәтерләмәйем инде, һуңынан тағы Белоруссияла булдым, шунда уҡ Еңеү көнөн ҡаршыланым. Өйгә 1945 йылдың августында ғына ҡайтырға насип булды. Станцияға килеп төшкәс, беҙҙе ауылдаштар ат менән ҡаршы алды. Был минең үҙ ғүмеремдә иң бәхетле көнөм булды, - тип хәтерләй ветеран түшендәге Бөйөк Ватан һуғышы орденын, "Германияны еңгән өсөн" миҙалын һәм башҡа дәүләт наградаларын һаҡ ҡына тәҙәтеп.

**Сергей СПАТАР.**

ҺУҒЫШТЫ ҠУРАЛМАЙЫМ...

# АТАЙ ТӨҪӨН КҮРҺӘТМӘНЕ...



**Минең атайым Зәһит Ҡотлоәхмәт улы 1942 йылдың ғинуар айында һуғышҡа киткәс, ике айҙан мин тыуғанмын. Әсәйем мине тапҡанда хәле үтә насарайып киткәс, колхоз рәйесе Абдрахимов Әхмәтғәзиз бабай Рафиҡов Фазлиәхмәт ағайҙы 40 километр алыҫлыкта ятҡан Йомағужа ауылына табибҡа ебәрә. Шулай итеп, әсәйемдең ғүмерен һаҡлап ҡалған был ағайҙарға мәңге рәхмәтлемен.**

Ул ваҡытта иң оло апайыма - 10, икенсеһенә - 6, өсөнсөһөнә 3 йәш ине. Һуғыш бөтөп, самолет ҡағыҙ төшөргәндә өс йәшлек булһам да хәтерләйем. Әсәйем һөйләүенсә, ҡыш көнө молотилканы ҡарҙан көрәп сығарып, иген баҫҡандар, яҙ кешеләрҙең һыйырын егеп, ер тырматып, иген сәскәндәр, унан утау, бесән эштәре башланған. Әсәйемдең бесән ваҡытында яурынына ҡоро утын һалып, тыҡрыҡтан сығып килгәне күҙ алдында тора. Рая апайым, мәрхүм, яҙлы-көҙлө туң ерҙән серек картуфты ҡаҙып алып, ҡоймаҡ бешерә торғайны, шул тиклем тәмле тойола ине ул. Атҡолаҡтан да ҡоймаҡ бешергәне хәтерҙә.

1950 йыл иген уңғас, халыҡ туйып ҡалды. Колхоз рәйесе Президентыбыҙҙың атаһы Рәхимов Ғөбәйҙулла ағай ине. Әсәйем менән Мөнәүәрә апайға иң күп урак урған өсөн ҡыҙыл әләм бәйләнгән арба менән бойҙай килтерҙеләр. Шул йылды яландағы ырҙында колхозсылар ҙур ҡаҙанға ҡурмас ҡурып ашап, туйыныл ала торғайны.

Әсәйем атайымды ныҡ көттө. Беҙ малай саҡта самолет үтеп барһа: "Самолет, атайымды ҡайтар", - тип ҡысҡыра торғайныҡ. Әммә атайым ҡайта алманы, Сталинградта һәләк булды. Әсәйем яңғыҙы шулай дүрт балаһы ҡарап, кеше итеп үҫтерҙе. Атай төҫөн, атай һөйөүен күрһәтмәгән, әсәйем кеүек күп ҡатын-ҡыҙҙарҙы тол иткән һуғышты ғүмер буйы ҡәһәрләйем.

**Ишмөхәмәт ШӘҺИВӘЛИЕВ,**
**Күгәрсен районы Тәүәкән ауылы.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## Баҡсаңды милкеңә күсерҙеңме?

**Баҡса участкаһы һәм ундағы йорт-ҡаралтыны хосусилаштырыу тураһында төрлө сығанаҡта төрлө мәғлүмәт бирелә, ҡайһыһына ышанырға белеп булмай. Ошо мәсьәлә буйынса аңлатма бирһәгеҙ ине?**

- Төрлө фекерҙәр тыуҙырған беренсе мәсьәлә - баҡса участкаһын хосусилаштырыу ваҡыты. Законда был йәһәттән тәғәйен гено ваҡыт билдәләнмәгән. Бындай сикләү ябайлаштырылған тәртиптә фәҡәт ҡаралтыларҙы хосусилаштырыуға ҡағыла (күсемһеҙ милек объекттары тураһында декларация нигеҙендә), йәғни 2015 йылдың 1 ғинуарына тиклем.

Икенсе мәсьәлә баҡса участкаларының сиктәрен билдәләүгә ҡағыла. Сик билдәләү баҡсасыларҙың теләге буйынса башҡарыла. Межалау - ул урындағы участкала сиктәрҙе билдәләп сығыу. Әгәр быны эшләмәһәң, киләсәктә ошо ерлектә күршең менән бәхәс килеп тыуыуы ихтимал.

Хосусилаштырыуҙың ябайлаштырылған тәртибе - баҡсасылыҡ идараһы рәйесенән белешмә, ер участкаһының кадастр паспортын алып, уларҙы теркәү палатаһына тапшырырға кәрәк. Закон буйынса ябайлаштырылған тәртип сик билдәләүгә ҡағыла һәм хосусилаштырыу эшен байтаҡҡа еңеләштерә, ләкин ҡалған эштәр элеккесә башҡарыла, йәғни һеҙҙең милеккә ер участкаһы бирелеүе хаҡында ҡала (район) хакимиәтенең ҡарары һәм ер участкаһының кадастр паспорты теркәү органына тапшырыла. Ә бындай ҡарарҙы алыу өсөн байтаҡ документтар йыйырға һәм уны төрлө инстанцияларҙа дөрөҫләтеп алыу кәрәк буласаҡ.

Күптәр хосусилаштырыу хаҡы буйынса һорау бирә. Ҡайһы бер матбуғат баҫмаларында хәбәр ителеүенсә, уның ни бары 100 һумға төшөүе хаҡындағы һүҙ дөрөҫ түгел. Әгәр баҡса участкағыҙ сиктәрен билдәләргә ҡарар иткәнһегеҙ икән, был һеҙгә 300 һумға һәм унан да күберәк суммаға төшәсәк. Хосусилаштырыу буйынса коммерция ойошмалары хеҙмәттәре 2500 һум һәм унан артығыраҡҡа барып баҫа. Һеҙ ишетеп ҡалған 100 һум (ә 2010 йылдың 29 ғинуарынан - 200 һум) ул ни бары ер участкаһына милекселек хоҡуғын теркәү өсөн дәүләт пошлинаһы. Бөтә документтарҙы үҙ аллы туплап, ер участкаһы сиктәрен билдәләтмәгән хәлдә һеҙ бына ошо суммаға иҫәп тота алаһығыҙ.

## Сиратты кем боҙа?

**Салауат ҡалаһында йәшәйем. Ҡала хакимиәтенең йәштәр бүлегендә торлаҡҡа субсидия алыу өсөн өсөнсө йыл инде сиратта торам. Минән алда торғандар сират буйынса субсидия алалар, ә минең сират, киреһенсә, һаман артҡа сигенә. Республика прокуратураһына яҙғайным, ниндәйҙер аңлайышһыҙ яуап алдым. Хәҙер миңә нишләргә?**

- Урындағы үҙидара органының ҡылығына дәғүә белдереп, ғариза (ләкин иск түгел!) яҙығыҙ, сөнки һеҙ әлегә кем шул рәүешле сиратығыҙҙы тотҡарлауын белмәйһегеҙ бит. Ә суд был мәсьәләне ҡарағандан һуң тейешле ҡарар сығарасаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



❖ **Бөйөрҙәрҙе, ашҡаҙан-эсәк тракты һәм тотош организмды таҙартыу өсөн:** бер ҡалаҡ етен орлоғон ҡайнар һыу менән бешекләп, 15 минут төнәткәс, бер балғалаҡ бал өҫтәп, көнөнә бер тапҡыр эсһән, организм таҙара. Бер үк ваҡытта иҙелгән алмаға бал ҡушып ашау ҙа яҡшы.

❖ **Аппетит булмаһа:** 5 г әрем, 5 г меңъяпраҡ, 100 г бәпембә тамырын бер стакан һыу менән бешекләп төнәткәс, уны өс өлөшкә бүлеп, йылы көйө ашарҙан 15-20 минут алда эсергә.

❖ **Бөйөрҙәрҙе таҙартыу өсөн:** стакандың өстән бер өлөшөндәй һоло оно алып, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтергә һәм йылы көйө эсергә. 1 балғалаҡ бал ҡушһаң да ярай. Ай һайын 10 көн йәки һәр кварталдың 1 айы буйы эсергә. Бер үк ваҡытта күрәгә, ҡара емеш компоты эсеү файҙалы.

❖ **Бөйөрҙәрҙе, организмды ныҒытыу өсөн:** 2 ҡалаҡ әлморон емешен онтап, 1 ҡалаҡ ҡайын бөрөһө, 1 балғалаҡ бөтнөктө ярты литр ҡайнар һыу менән термоста төнәтергә. Өскә бүлеп, 1 ҡалаҡ мүк еләге һуты, 1 балғалаҡ бал ҡушып, көн оҙононда эсеп бөтөргә. 10-14 көн буйы эсергә.

❖ **Тынысланыу өсөн:** 1-әр балғалаҡ арыҫлан ҡойроғо (пустырник) үләне, ҡомалаҡ тубырсығы, әлморон, ярты балғалаҡ бөтнөктө 1 стакан ҡайнар һыу менән бешекләп төнәткәс, 1 балғалаҡ бал болғатып, йоҡлар алдынан йылы көйө эсергә. Ирҙәргә ҡомалаҡ тубырсығы менән мауыҡмаҫҡа кәңәш ителә.

❖ **Иммунитетты ныҒытыу өсөн:** саҡ ҡына имбирь, ҡәнәфер, корицаны 2-3 минут төнәткәс, һөҙөп, эсергә. Был төнәтмә менән түлһеҙлектән дә дауаланырға була, бының өсөн уны ҡыҙҙатындарға ла, ирҙәргә лә эсергә кәрәк.

❖ **Яҙғы һалҡын ел тейеп, тамаҡ шешеп торһа:** 1-әр ҡалаҡ шалфей, ҡайын бөрөһө, ҡарағай энәләрен һауытҡа һалып, 1 литр ҡайнар һыу менән бешекләргә. Уның боҫонда ауыҙ менән тын алып, танауҙан сығарып, ингаляция эшләү ярҙам итер.

❖ **Көҙҙәне һөмгол тотоу, күңелде күтәреү өсөн:** һары мәтрүшкәне, кейәү үләнен, аҡ сәскәне 1-әр балғалаҡ алып, 1 стакан ҡайнар һыу менән бешекләп, өскә бүлеп, бал ҡушып, ун көн дауамында эсергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




## ҠЫҘ БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Ауыҙ өсөн ҡағиҙәләр

● Бер кеше һүҙ башлаһа, зарур булмайынса шул хәлдә ташлап китмәгеҙ. Оло кешеләрҙең һүҙҙәренә ҡаршы һөйләйәсәк һүҙҙәрегеҙ булһа, уңайлы ваҡытты көтөп, әҙәпле генә һөйләгеҙ.

● Оло кешеләрҙең һүҙҙәренә ҡатнашмағыҙ, үҙегеҙҙән берәй нәмә һорамаһалар, улар алдында һөйләшмәгеҙ. Һөйләшкәндә артыҡ яй йәки ҡыҫҡырып һөйләмәгеҙ. Бер һүҙҙе күп мәртәбә ҡабатламағыҙ.

● Һөйләшкәндә аҡыллы кешеләр кеүек аҙ һәм аҡрын һөйләгеҙ. Һөйләшер өсөн иптәштәрегеҙгә һәм мәжлестә булғандарға ваҡыт ҡалдырығыҙ. Һөйләүсе булһа, тыңлағыҙ, тыңлаусы булғанда яҡшы һөйләгеҙ. Кеше һүҙен аҙағына тиклем сабыр итеп тыңлағыҙ.

● Аңларға кәрәккән һүҙҙе тулыһынса аңламаған хәлдә: "Аңламаным, тағы һөйлә!" - тип тәрбиәһеҙлек күрһәтмәйенсә: "Аңлап етә алманым, тағы һөйләргә мөмкин булмаҫмы? Рәхим итеп һөйләгеҙ, бәлки, аңлар инем", - рәүешендә инсафлы үтенегеҙ.

● Һөйләшкәндә ҡыҫҡырмағыҙ, асыуланып һәм ҡыҙып китмәгеҙ. Тауышығыҙҙы боҙмағыҙ. Аңламаҫлыҡ һүҙҙәрҙе ҡатнаштырып һөйләмәгеҙ. Һис кемгә яман һүҙ әйтмәгеҙ. Бигерәк тә: "Белмәйһең, ялған һөйләйһең, аңламайһың!" - тимәгеҙ. Бындай һүҙҙәр иң тәрбиәһеҙ кешеләргә хас.

● Һүҙегеҙгә ҡаршы килеүсе булһа, асыуланмағыҙ. Бәлки: "Ихтимал, һеҙҙең һүҙегеҙ ҙә дөрөҫтөр, ләкин мин былай тип беләм", - тигән кеүек әҙәпле һәм мөләйем яуаптар ҡайтарығыҙ.

● "Белмәйһең, яман һөйләйһең", - тиеүсе кешегә һис асыуланмағыҙ һәм ахмаҡтар кеүек ҡыҙмағыҙ. Үҙ һүҙегеҙҙең дөрөҫлөгөнә матур итеп дәлил күрһәтегеҙ. Ләкин ахмаҡ әҙәмдәргә яуап бирәм тип тырышмағыҙ. Өндәшмәгеҙ һәм яндарынан ситкә китегеҙ. Уларға өндәшмәү ҡәҙәр шифалы яуап юҡ.

● Көләмәксе һөйләмәксе булһағыҙ, һүҙегеҙҙе әйтмәҫ борон көлмәгеҙ, һүҙегеҙҙе әйткәндән һуң да көлмәҫкә тырышығыҙ.

● Һөйләгәндә ялған һөйләмәгеҙ, ғәйбәткә кермәгеҙ, һүҙ йөрөтмәгеҙ, кеше һүҙен арттырып һөйләмәгеҙ, ялған һөйләүҙән үлемде артыҡ күрегеҙ. Дөрөҫ һүҙле ҡатындар - иң хөрмәтле ҡатындар, иң хөрмәтле кешеләр икәнен онотмағыҙ. Яңылыш һөйләгәнегеҙҙе белһәгеҙ, хатағыҙҙы танығыҙ.

● Һөйләгәндә ант итмәгеҙ. Дөрөҫ һөйләйем, тимәгеҙ, былай итеп гонаһ эшләмәйенсә, үҙ инсафлығығыҙ менән дөрөҫ һөйләгеҙ. Ант итеү һәм "ысын һәм дөрөҫ һөйләйем"тип әйтеү ялғансыларҙың ғәләмәтелер.

● Һәр ишеткәнегеҙҙе һөйләмәгеҙ. Һүҙегеҙҙе артыҡ оҙон итмәгеҙ. Зарур булмаһа, ҡайғылы һүҙҙәр һөйләмәгеҙ һәм һис кемгә урынһыҙ ҡаршы һөйләмәгеҙ. Үҙегеҙҙән һәм башҡаларҙан шикәйәт итеп ултырмағыҙ. Асыуланырға ашыҡмағыҙ.

● Үҙ-үҙегеҙҙе маҡтамағыҙ. Үҙегеҙгә кәрәкмәгән һүҙгә ҡатнашмағыҙ. Сит кешеләрҙең серҙәрен тикшереп йөрөмәгеҙ. Ике кеше һөйләшкәндә араларына барып кермәгеҙ. Үҙегеҙгә аманат ителгән серҙәрҙе шәриғәт рөхсәтенән башҡа ерҙә һис фаш итмәгеҙ.

(Дауамы бар).

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Өфөбеҙҙең башҡорт донъяһында оло ваҡиға итеп баһаланып саралар булып тора һәм улар башлыса балалар менән бәйле. "Шаяниум" конкурсы баш ҡалалағы башҡорт балаларын халҡыбыҙҙың юморына, тапҡыр һәм шаян һүҙенә ылыҡтырҙы. "Сәсәндәр" конкурсы иһә баш ҡалалағы башҡорт балаларын халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларына, аҫыл аҡылына, тамырҙарына яҡынайтты. Һәм бына тағы бер күркәм сараға - "Киләсәк беҙҙән башлана!" тип нарыҡланған Балалар ҡоролтайына йыйылды баш ҡаланың башҡорт балалары һәм халҡыбыҙ йәшәйеше, тарихы, туған теле, мәҙәниәте тураһындағы һүҙен бейек трибунанан тороп яңғыратты, йыйылыусы тиҫтерҙәренең йөрәге, аңы аша үткәрҙе. Балалар күтәргән мәсьәләләр, улар теленән сыҡҡан тәҡдимдәрҙең ни тиклем етди, урынлы булыуына, үҙ ваҡытында әйтелеүенә залдағы бар ололар хайран ҡалды. Аҡыллы һәм ҡыйыу йәштәребеҙҙән уҙҙырырлыҡ итеп әйтеп булмаҫ, тип, Балалар ҡоролтайында сығыш яһаусыларҙың үҙҙәренә һүҙ бирәбеҙ был юлы.**

# ТУҒАН ТЕЛГӘ ӨЙРӘНМӘЙҘӘР,

## туған тел бит асылыбыҙ нигеҙе

**Фаягөл ЮНЫСОВА, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы:** Республика гимназияһы, лицейы исемен йөрөткән уҡыу йорттарында фәҡәт башҡорт балаларын туплау мәсьәләһен хәл итергә кәрәк, сөнки республикабыҙ ауылдарында йәшәүсе һәләтле балалар, тейешле шарттар булмау сәбәпле, дөрөҫ юл таба алмай аҙаплана. Бындай абруйлы уҡыу йорттарында белем алыу уларҙы төрлө яҡлап камиллаштырасаҡ һәм илебеҙҙе матур эштәре менән биҙәрлек рухлы кадрҙар итеп үҫтерәсәк. Баш ҡалала башҡорт балалар баҡсаларының һанын арттырғанда унда йөрөгән балаларҙа бәләкәйҙән туған телгә, илгә, мәҙәниәтебеҙгә һөйөү тәрбиәләү мөмкин буласаҡ. Тәртипле, әҙәпле, әхләҡлы балалар тәрбиәләү өсөн халыҡ араһында Ислам ҡанундарын таратыу ҙа мөһим.

**Фатима ЯНБАЕВА, 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы уҡыусыһы:** "Ҡала башҡорто" имиджын асылына, тамырына яҡынайтыу - бөгөн беҙҙең төп бурыстарыбыҙҙың береһе. Быға тиклем, ҡалала тыуып-үҫкәнһең икән, туған телендә һөйләшмәһәң дә, туған телеңдә йырламаһаң да була, тигән ҡараш йәшәне. Был ҡот осҡос әҙәмтәләргә килтерҙе: быуын-быуын башҡорт үҙ асылынан ситләштерелде, тамырҙарынан айырылды. Улар үҙҙәренең манҡорт булыуы сәбәбен йышыраҡ башҡорт балалар баҡсаһына йөрөмәүҙә, башҡорт мәктәбендә уҡымауҙа, йәнәһе, туған телде өйрәнеүгә шарттар булмауында күрә. Әммә был сәбәп түгел икәнен аңларға, бындай һылтаныуҙарға көртә ҡуйырға ваҡыт. Туған телгә өйрәнмәйҙәр, туған тел бит асылыбыҙ нигеҙе. Асылыбыҙ ғаиләлә нығына, дауам итә, беҙ ғаиләлә шәхес булып та, милләт булып та формалашабыҙ. Тимәк, һәр башҡорт ғаиләһе үҙе бәләкәй генә дәүләткә әйләнергә тейеш. Ул дәүләт үҙ йолалары, үҙ законлары менән йәшәһен, унда мотлаҡ туған телдә һөйләшһендәр, туған телдә йырлаһындар, аралашһындар, үҙ халҡының тарихын өйрәнһендәр. Бала үҙенең кем икәнлеген, кем балаһы булыуын, артында ниндәй халыҡ тороуын тап ғаилә-дәүләттә танып белә.

"Ҡала башҡорто" имиджын ғаиләнән ситтә - мәктәптә, юғары уҡыу йортонда, хеҙмәт коллективында ла нығытыу - икенсе бурыс.

"Ҡала башҡорто" имиджы - ул белемле, туған теленән башҡа ла бер нисә тел белгән, заман технологияларын үҙләштергән кеше. Беҙҙең һәр беребеҙ ошоға ынтылырға бурыслы. Миңә быйыл Мәскәүҙә АҠШ илселеге ойошторған сарала ҡатнашырға тура килде. Унда милли башҡорт кейеме кейеп, сәхнәгә сығып, инглизсә сығыш яһаным, башҡортса йырланым. Минең кейемемә һәм башҡорт моңона америкалыларҙың шундай ҙур ҡыҙыҡһыныу күрһәтеүе мине хайран итте. Халҡым өсөн шундай ғорурлыҡ тойғолары кисерҙем. Тимәк, һәр ерҙә лә үҙеңдең башҡорт балаһы икәнеңде таныта йөрө, һинең артыңда тотош милләт, хатта республика тора икәнен иҫеңдән сығарма икән.





**Байрас МӘҺӘҘИЕВ, 39-сы гимназия уҡыусыһы:** Беҙ бик ҡатмарлы заманда йәшәйбеҙ. Бөтә донъяны глобалләшеү тигән процесс баҫып барғанда, халҡыбыҙҙың йолаларын һаҡлап ҡалыу еңел түгел. Милләтебеҙҙең мәҙәниәте, сәнғәте бар донъяны таң ҡалдырған инде, беҙгә хәҙер милли спортты ла үҫтерергә кәрәк. Олимпия спортсыларын барыһы ла белә, ғәҙәттә, еңеүсенең данын уның иле лә бүлешә. Быны беҙ Ғабдрахман Ҡадыров, Максим Чудов, Ирек Зарипов һ.б. миҫалында асыҡ күрәбеҙ. Шуға ла спорт - ул милләтте башҡаларға танытыу, милли ғорурлыҡты үҫтереү өсөн иң уңайлы сара, тип әйтергә була. Спорттың халыҡтың һаулығын нығытыу, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау, йәштәрҙе наркотик, эскелектән аралау йәһәтенән дә әһәмиәте ҙур. Профессиональ спорт менән бер рәттән, массалы спорт та үҫешергә тейеш. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, бөгөн ауыл йәштәренә спорт менән шөғөлләнеү өсөн спорт комплекстары юҡ, булғандары ла район үҙәктәрендә. Әммә унда, мәҫәлән, милли көрәш, ат ярыштары, уҡ атышыу, мәргәнлектә һынашыуҙы ойоштороу йолаларҙы һаҡлап ҡалырға, йәштәрҙең һаулығын нығытырға ярҙам итер ине, етмәһә, был спорт төрҙәре халҡыбыҙ менталитетына ла яҡын. Йәштәр спорт менән күпләп шөғөлләнә башлаһа, һуңғы йылдарҙа йыш осрай торған суицид кеүек күренештәр ҙә һирәгәйер ине, сөнки спорт менән шөғөлләнгән кешелә ауырлыҡтарҙы еңә белеү, көтөл-

мәгән уңышһыҙлыҡтар алдында ҡаушап төшмәү кеүек сифаттар тәрбиәләнә.

**Тимур ВАХИТОВ, 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы уҡыусыһы:** Ҡала башҡорто булараҡ, мин ҡала башҡорт йәштәре ниндәй булырға тейеш, тигән һорауға яуап эҙләнем. Ҡала башҡорто туған телендә яҡшы итеп һөйләшә белергә, аралашырға тейеш; ул халҡының тарихын белергә, башҡа милләт вәкилдәре менән башҡорт халҡының тарихы, килеп сығышы тураһында бәхәстәр тыуһа, үҙ позицияһын дәлилләй алырға тейеш; шәжәрәһен белергә, илһөйәр булырға тейеш. Ҡала башҡорто Өфө, Мәскәү, Санкт-Петербург университеттарында ғына түгел, Гарвард кеүек донъяға билдәле уҡыу йорттарында белем алырға ынтылырға тейеш; ул алдына маҡсат ҡуя белһен. Арабыҙҙа депутат, министр, ҙур предприятие директоры булырға хыялланыусылар күберәк булһын; күп телдәр белһен, сөнки телдәр белеү күп мөмкинлектәр аса, сит милләттәргә үҙебеҙҙе танытырға ярҙам итә; сәләмәт тормош алып барыу, спорт менән шөғөлләнеү мотлаҡ. Ул мотлаҡ заманса кейенергә, әҙәпле, тәртипле булырға, компьютерҙы, заманса технологияларҙы яҡшы белергә, булған һәләттәрен үҫтерергә, коммуникатив мәҙәниәткә эйә булырға тейеш. Быларҙың тормошҡа ашыуы өсөн ата-әсәләр ҙә яуаплы, сөнки кешенең тормоштағы уңыштарының да, уңышһыҙлыҡтарының да сығанағы - ғаилә.

**Тәлғәт ҒӘЛИМЙӘНОВ, Республика башҡорт лицей-интернаты уҡыусыһы:** Тыуған илде һаҡлау - ир-егеттең изге бурысҡарының береһе. Ошо бурысты Башҡортостан егеттәре намыҫ менән башҡара, әммә һуңғы йылдарҙа хәрби хеҙмәткә барырға теләүселәр һаны кәмей бара. Бында кем ғәйепле һуң: әрмеме, йәмғиәтме, ата-әсәме? Минә ҡалһа, был атайҙар мәктәбенең етешмәүенән килә. Мәктәп тә малайҙарҙы хәрби хеҙмәткә әҙерләргә тейеш, тик бының өсөн өлкән синыфтарҙа бер сәғәт кенә ваҡыт бирелә. Бер сәғәттә генә балаға хәрби хеҙмәткә әҙерләп булмауы барыһына ла билдәле. Шуға ла синыф сәғәттәрендә, тарих, әҙәбиәт дәрестәрендә, ғаиләлә илһөйәрлек тойғоларын тәрбиәләүҙә көсәйтеү мөһим. Күп егеттәр әрмегә барғас, контракт төҙөп, ҡыҙыу нөктәләргә китә. Бының сәбәптәре төрлөсә: ата-әсә менән конфликт, аҡсаһыҙлыҡ, юғары уҡыу йортона уҡырға инә алмау. Егеттәребеҙ үҙҙәрен утҡа ташламаһын өсөн дә ғаиләлә атай абруйы көслө булырға тейеш. Беҙҙең лицейҙа тик егеттәр генә белем ала. Уларҙың күптәре юғары белем алғас ҡына әрмегә барыуҙы хуп күрә, сөнки мәктәпте әле генә тамамлаусы йәш кеше белемһеҙ ҡалһа, хәрби хеҙмәтен үтеп ҡайтҡандан һуң, эшкә урынлашыу проблемаһы килеп тыуасаҡ. Мәктәптә физик әҙерлекте көсәйтеүгә лә иғтибар бүлеү кәрәк, сөнки физик яҡтан әҙер булыу үҙенде әрме хеҙмәтенә әҙерләүҙең бер өлөшө. Әммә ҡайһы бер мәктәптәрҙә шарттар булмау сәбәпле, быны тормошҡа ашырыу ауырға төшә. Мәҫәлән, беҙҙең лицейҙа 400-гә яҡын егет уҡый, заманса спорт залы юҡ. Физик яҡтан көслө булған йәштәр генә киләсәктә илебеҙ өсөн таяныс була алыуын онотмайыҡ.

**Эмма ҒҮМӘРОВА, 136-сы Башҡорт лицейы уҡыусыһы:** Мине ҡала йәштәренең хатта үҙ-ара ла башҡорт телендә аралашмауы борсой. Был проблеманы башҡорт теленең абруйын күтәреп хәл итергә була, башҡорт телен һаҡлап ҡалабыҙ, тиһәк, уның ҡулланыу даирәһен киңәйтергә кәрәк. Шуға ла Өфө ҡалаһы йәштәре өсөн милли баҫма булдырырға, Интернетта башҡортса сайттар асырға, радио-телевидениела балалар өсөн тапшырыуҙарҙың һанын арттырырға тәкдим итәм. Арабыҙҙа битараф, белем алырға теләмәгән йәштәрҙең булыуы ла хәүефләндерә мине. Уларҙы тәрбиәләү маҡсатында мәктәптәрҙә балалар ойошмалары булдырыу зарур. Малайҙар һәм ҡыҙҙар өсөн әхлаҡ дәрестәре үткәрелеүен дә теләр инем. Башҡорт теле буйынса тапшырылған БДИ юғары уҡыу йортона уҡырға ингәндә рус теленән бирелгән БДИ-ға тиңләштерелһен ине. Был да башҡорт теленең бәсен арттырыуҙа ҙур роль уйнар, тип уйлайым.

**Зөһрә БАЙМӨХӘМӘТОВА, Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы:** Ҡасандыр Рауил Төхвәт улы Бикбаев үҙенең бер сығышында ошолай тигәйне: " Минең өсөн донъяла ике төрлө башҡорттар бар. Берәүҙәре - халҡы өсөн янған, ерен, телен хәстәрләгән, милләтенә файҙа килтерергә тырышып йәшәгән башҡорттар. Икенселәре - ил һәм халыҡ яҙмышына битараф, милләтенә ҡул һелтәгән башҡорттар." Мин үҙемде беренсе төркөмгә индерәм һәм Башҡортостанымдың, милләтемдең киләсәге өсөн кәрәкле милләт ҡыҙы булырға ынтылам. Башҡортлоҡ ата-әсәнән, ғаиләнән башлана. Башҡортлоғондо башҡортса үткән төрлө сараларҙа ҡатнашып, театрҙарға йөрөп, туған телдә сыҡҡан баҫмаларҙы уҡып та раҫлайһың.

Өфөлә башҡорт мәктәптәре күп, улар һаман да асыла тора. Уйлап ҡараһаң, башҡорт мәктәптәре ҡаланың башҡа уҡыу йорттарынан бик айырылмай. Сөнки тегеһендә лә, быныһында ла башҡорт телендә тик тел, әҙәбиәт һәм мәҙәниәт кенә уҡытыла. Ошо дәрестәрҙән сыҡһаң, телде бөтөнләй онотаһың һәм рус мөхите кешеһенә әүереләһең, сөнки башҡа предметтар бөтәһе лә русса алып барыла. Башҡорт теленә, төп милләтте тәшкил итеүсе халыҡтың теле булараҡ, иғтибар ҙур булырға тейеш. Уҡыусылар дәрестәрҙә һөйбәт билдә өсөн генә ултырмаһын, ә уҡытыусылар стаж барһын, эш хаҡы түләнһен, тип кенә урын биләмәһен ине. Юҡһа, бындай битарафлыҡтың аҙағы үтә фажиғәле буласаҡ бит. Күренекле рус яҙыусыһы Константин Паустовский: "Туған теленә битараф кеше - ҡырағай. Ул үҙенең тәбиғәте менән үк зыянлы. Сөнки уның телгә ҡарата битарафлығы үҙ халҡының үткәненә, бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә битараф булыуы менән аңлатыла", - тип юҡҡа ғына әйтмәгән.

**Альбина СӘЙТОВА, 141-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе уҡыусыһы:** Мин ҡалабыҙҙың 141-се рус мәктәбендә уҡыйым. Туған телемде бик яратам. Уҡыусыларҙың туған теленә ваймһыҙ ҡарашы, уны ихтирам итмәүе мине хәүефкә һала. Әлбиттә, туған телгә һөйөү уҡытыусы аша ла бирелә. Шуға ла башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары төрлө мауыҡтырғыс алымдар, яңы мәғлүмәти технологиялар ҡулланып, дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы итеп үткәрһә, уҡыусыларҙа был предметҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу уяныр ине. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙең дәрестәр ҡала мөхитендә тәрбиәләнгән, рус телендә аралашҡан уҡыусыларға иҫәпләнеп сығарылмаған. Ҡала балаларының тормошон, уларҙың шөғөлдәре, ҡыҙыҡһыныуҙарын сағылдырған тексҡар юҡ, ҡайһы бер текстар хатта йәш үҙенсәлектәрен күҙ уңынан ысҡындырып төҙөлгән. Ғалим апай-ағайҙарыбыҙ был өлкәлә уйланһын ине, тигән теләктә ҡалам. Ҡалабыҙҙың күп мәктәптәрендә башҡорт теле кабинеттары заман талаптарына яуап бирерлек итеп йыһазландырылмаған. Беҙгә башҡорт теле дәрестәрендә компьютерҙа эшләү мөмкинлектәре юҡ, мультимедиа проекторы, экран, интерактив таҡта тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Дуҫтарым, әйҙәгеҙ, уйланайыҡ, яныбыҙҙағы телем, илем, тип янып-көйөп йөрөгән милләттәштәребеҙгә "батыр" тип өндәшәйек, бер-беребеҙгә терәк булайыҡ, ауыр саҡта ярҙам итәйек. Беҙҙә "бахыр" тип кәмһетеүселәргә лайыҡлы яуап биреү өсөн тарихыбыҙҙы өйрәнәйек, тартынмайынса, туған телебеҙҙә һөйләшәйек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өс сәғәт тирәһе барған ҡоролтай ултырышы бер сәғәттә үткән һымаҡ тойолдо: һәр баланың сығышы ҡыҙыҡлы булды, бер тынала тыңланды. Уларҙы залда ултырыусы ҡоролтай делегаттары - Өфөнөң төрлө мәктәптәренән килгән башҡорт балалары - ҡул сабыуҙар менән генә түгел, төрлө өҫтәмә сығыштар, тәҡдимдәр менән тулыландырҙы. Делегаттар араһында ултырған уҡытыусылар, тәрбиәселәр, власть һәм йәмәғәтселек вәкилдәре балаларҙы бүлдерергә, оялтырға ҡурҡҡандай, тын да алмай тыңлап ҡына ултырҙы, ара-тирә күҙ йәштәрен һөрткөләп алыусылар ҙа булды. Туған теленә, милләтенә, республикаһына ҡағылған бер генә мәсьәләгә лә битараф ҡала алмаған балалар сығышын битараф ҡына тыңлап булмай ине шул...**

**Әйткәндәй, балаларыбыҙ өлкән быуынға шундай матур өлгө күрһәтте: йыйындар, ҡоролтайҙар трибунаһын эшлекле һөйләшеүҙәр, аҡыллы тәҡдимдәр өсөн файҙаланыу, тыңлаусыларҙы ҡыҙыҡһындыра, һоҡландыра, уйландыра белеү өлгөһө. Өлкән быуын ошо фәһемгә эйәрһен, трибуналарға күтәрелеп, кешене төңөлдөрөр, көлдөрөр, нәфрәтләндерер, иң мөһиме, ҡәҙерле ваҡытты әрәмгә үткәрер хәбәрҙәр һөйләүҙән тыйылһын ине. Ошо килешмәгән ҡылыҡтары менән был юлы ла матур йыйынды боҙа яҙғандарға төбәлә был һүҙҙәр. Бер риүәйәттәгесә, бороңғо аҡһаҡалдарыбыҙ илгә ниндәйҙер хәл иткес һүҙ әйтер алдынан өс һорау - өс ҡапҡа аша үтер булған. Тәүҙә аҡһаҡал үҙенән: "Һүҙҙәрем хаҡ булырмы?" - тип һораған. Хаҡ булғанына төшөнгәс, икенсе һорау-ҡапҡаға күскән. Үҙенә: "Минең һүҙҙәремә ихтыяж бармы һуң?" тигән һорауҙы биргән. Әгәр ихтыяж булһа, аҡһаҡал артабан үҙ-үҙенә ошондай һорау биргән: "Минең һүҙҙәремдә изгелек бармы?". Был һорауына ыңғай яуап булғанда ғына аҡһаҡал ил буйлап таралыр һүҙҙәренә ирек биргән. Был аҡыл бөгөн урынлы-урынһыҙ трибуналарға күтәрелеп, дөйөм һәм файҙаһыҙ һүҙ һөйләгәндәргә һабаҡ бирә һымаҡ.**

Ләйсән НАФИҠОВА әҙерләне.

*ҺУҒЫШТЫ КҮРАЛМАЙЫМ...*

# ҒӘЛЛӘМОВТАР НӘҪЕЛЕН КӘМЕТТЕ



**Мин һуғыштан һуң тыуған быуын вәкиле булараҡ, шул осор кешеләренең ниндәй михнәттәр аша үтеп, ниҙәр кисергәнен тыңлап, ниндәй яралар менән йәшәүен күреп үҫтем.**

Әбйәлил районы Үтәгән ауылының уртаһында бер-береһенә терәлеп, Ғәлләмовтарҙың өс ғаиләһе йәшәгән. Бөйөк Ватан һуғышы ошо өс ғаиләнең дә йортона ҡағылып үтеп, яҙмыштарын яралаған. Уларҙың араларынан иң өлкәндәре атайымдың бер туған ағаһы, минең олатайым Ғәлиәкбәр Әбүзәр улы береһенән-береһе бәләкәйерәк өс малайын ҡалдырып, һуғыштың тәүге көнөндә үк үҙ ирке менән дошманға ҡаршы яуға китә. 1942 йылда олатайымдың хәбәрһеҙ юғалыуы тураһында ҡағыҙ килә. Улдары Фәиз, Салауат һәм Һаҙый ағайҙар аталары кеүек намыҫлы, эшһөйәр һәм сос булһалар ҙа, ғүмер буйы етемлектә, атай һөйөүенән мәхрүм булып, арҡаланыр кешеләре булмағанлыҡтан, күнелдәре китекләнеп йәшәне.

Ғәлләмовтарҙың икенсеһе - минең атайым Сәлмән Әбүзәр улы 1940 йылда әрме сафына алына. Ереван ҡалаһы янында хеҙмәт итеп йөрөгәндә һуғыш башланып, ул 370-се артиллерия полкы составында һуғыштың тәүге көнөндә үк фронтҡа элгә. Ҡара диңгеҙ буйында бик күп ҡанлы һуғыштарҙа ҡатнаша атайым. 1942 йылда Севастополь ҡалаһы янында ҡаты бәрелештә контузия ала һәм иҫһеҙ килеш әсирлеккә эләгә. Дошман ҡулында ниндәй генә михнәттәр күрмәй ул. "Минең хужам кешелекле булып сыҡты, үҙҙәренән арткан ризыҡты этенә һәм унан да артһа, беҙгә бирә торғайны, - тип йөрәк һыҙлануыҙҙары аша иҫкә ала ине ул саҡтарҙы атайым. - Бер нисә тапҡыр ҡасырға маташып ҡараныҡ, ләкин ер-һыуҙы белмәгәс, тиҙ тотолдоҡ. 1945 йылда Америка ғәскәрҙәре килеп ҡотҡармаһа, беҙ шунда ҡоллоҡта үлер инек". Үҙебеҙҙең яҡҡа сығарылғас та төрлө һорау алыуҙар дауам итә. Ул һуғыштан 1946 йылдың аҙағында йонсоп, ҙур һөйәккә ҡалып ҡайтып төшә. Әсәйем Хәфизә Ғәлиәхмәт ҡыҙы менән матур ғаилә ҡороп, күп итеп балалар үҫтереп, һәммәһен уҡытып, кеше итәләр. Хәҙер икеһе лә мәрхүм инде.

Өсөнсө Ғәлләмов - атайымдың ике туған ҡустыһы Әкрәм ағайым һуғышҡа 18 йәшендә 1942 йылдың мартында алына. Ул 214-се уҡсылар дивизияһы составында өс-дүрт ай хәрби әҙерлек үткәндән һуң, Сталинград фронтына барып инә һәм ошо йыл аҙағына тиклем алғы һыҙыҡта дошман менән ҡаты алышҡарҙа ҡатнаша. Дон йылғаһы аша сыҡҡан ваҡытта сыуалышта Әкрәм ағайым әсирлеккә эләгә. Уларҙы тәүҙә Ворошиловградҡа, шунан һуң поезға тейәп, Воронеж өлкәһенә алып китәләр. Шул ваҡытта бер офицер ярҙамы менән ул ҡаса. Ләкин берәүһенән ҡотолһа ла, венгр һалдаттары ҡулына килеп ҡаба, һәм шунан башлана ла инде ғазаптар. Иң тәүҙә турникка ҡултыҡ аҫтынан еп үткәреп аҫып ҡуялар ҙа, бер никлем ваҡыттан төшөрөп, ергә йөҙтүбән һалып, ике яҡтан тал сыбыҡы менән туҡмайҙар. Кискеһен башҡарылған язаһы тағы ла ауырыраҡ була. Ҙур тимер мейесте ҡыҙҙырғансы яғып, эргәһенә баҫтырып ҡуялар ҙа, өҫтәренә ике биҙрә һыуыҡ һыу ҡойоп, төнгөләккә ер иҙәнле аласыҡҡа индереп бикләйҙәр. Ғазап-михнәттәрҙе күп күрә ул. 1943 йылдың ғинуарында үлем хәлендә етеп, госпиталгә эләгә. 1946 йылға тиклем хеҙмәт итә ул. Нескә күңелле, хис-тойғоға бирелеүсән ағайым гармунда өҙҙөрөп уйнар ҙа илар ине. Ғүмерен һуғышты ҡәһәрләп үткәрҙе ул.

Ауылға ҡайтһам, бала саҡ хәтирәләре яңыра, күңел тула. Ҡәһәрле һуғыш яҙмыштарын боҙмаһа, Ғәлләмовтар нәҫеле ишәйеп, гөрләп йәшәп ятыр ине...

Фәүҡинур САФИНА.
Әбйәлил районы Амангилде ауылы.

✓ Ҡылдан бәләкәс бумала эшләп алдым. Хәрефтәрҙе бармаҡ менән матур итеп тигеҙләнем дә алып барып бирҙем. Ағайым ҡыуанысынан бөтөн икмәк тоттороп ебәрҙе. Был көндө лә өйҙә ҙур байрам булды.



# Ғәфү ит, Ҡәләшем...

## Һиңә тигән селтәрҙе ризыҡҡа алмаштырҙыҡ

**"Һуғыш ваҡытында минең кеүек ыҙа сиккәндәр миллионлап булғандыр. Күргән михнәттәребеҙ уртаҡ булғас, яҙмыштарыбыҙ ҙа, яфа сигеүҙәребеҙ ҙә оҡшаштыр. Маҡсатым - хәҙерге йәштәргә һуғыштың бәхетле, көләс баласағыбыҙҙы нисек урлауын һөйләп биреү. Нисек кенә ауыр булмаһын, беҙҙең тырышып-тырмашып уҡыуыбыҙ, кеше булырға тырышыуыбыҙ ҙа дошманды еңергә ярҙам иткәндәр, тип уйлайым. Һуғыштан һуң Баймаҡ 1-се урта мәктәбенең башҡорт класында уҡыусы дүрт егет һәм ике ҡыҙ аслыҡ-яланғаслыҡ күреп, ыҙалыҡтар, мең михнәттәр менән саҡҡа 10-сы синыфты тамамланыҡ. Саҡҡа, тип әйтеүем белем юҡтан түгел, ә ауырлыҡтан, үлмәй ҡалғанлыҡтан. Ә беҙ барыбер бәхетле инек шул саҡта. Хәҙер бөтәһе лә артта ҡалды, тип әйтергә лә була, ләкин һуғыш осорондағы ыҙалыҡтар бер ҡасан да онотолмаҫ инде ул" - Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Б. Вәлид премияһы лауреаты Миҙхәт Байрамғолов үҙенең яҙмаларын шулай башлап китә. Ғөмүмән, уның яҙғандары беҙгә бик ҡыҙыҡлы тойолдо. Шуға ла уны гәзит уҡыусыларыбыҙға тәҡдим итмәксе булдыҡ.**

### Бәхет нет, ә далан большой...

1938 йыл. Йәй. Малайҙар урамда уйнап йөрөгәндә бер сиған ҡатыны усҡа ҡарап күрәҙәләп йөрөй ине. Хаҡына бер-ике дана йомортҡа һорай. Беҙ тиҙ генә тауыҡ ояһынан йомортҡа алып килдек тә, юрата башланыҡ. Ҡатын минең усты тотоп бер аҙ ултырғас: "Ой, малай, у тебя бәхет нет, а далан большой", - тине. Әйткәне дөрөҫкә сыҡты, шул көҙгә атайым мәрхүм булып ҡалды. Бәхет булмауы шул атайҙың үлеме булһа, ә "далан" тигәнен башта аңламаным, тик һүрәт төшөрә башлағас ҡына был һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөндөм.

1941 йылдың май аҙағында, мәктәптәрҙә уҡыуҙар бөткәс, малайҙар менән тауға әтнәкәс ашарға тип сығып киттек. Шул көнө бер иҫ киткес тәбиғәт күренешенә шаһит булдым. Көнбайышта ап-аҡ болоттар ҡояшҡа матур булып сағылып йөҙә. Ҡапыл көсһөҙ генә ел сыҡҡандай булды ла, болоттарҙы хәрәкәткә килтерҙе. Бына аҡ болоттар аҫҡа төшөп китә лә, өҫтә ҡара болоттар хасил була, шунан тағы аҡ болоттар өҫкә күтәрелә. Әйтерһең дә, бер-береһе менән уйнайҙар. Был күренешкә бер нисә секунд аптырап ҡарап торҙом. Ҡайтып, күргәндәремде әсәйемә һөйләнем. Әсәйем: "Балаҡайым, был хәлде үҙебеҙ генә беләйек, бер кемгә лә һөйләмәй тор", - тип иҫкәртеп ҡуйҙы. Һуғыш башланғансы был серҙе үҙебеҙҙә тоттоҡ. "Һуғыш башланды", - тигән һүҙҙе ишеткәс кенә әсәйем: "Һин, улым, төш кеүек күргән икәнһең аҡ болот менән ҡара болот көрәшеүен, бына бит, ҡәһәр неместәр беҙгә һуғыш башлаған..." - тине.

### Баймаҡ малайы булып китеүем...

Мин бала сағымды Әбйәлил районы Баҡыр-Үҙәк ҡасабаһында үткәрҙем. Унда баҡыр рудаһы шахтаһы булды. Һуғышҡа тиклем был ҡасабала кино күрһәтеү йорто, урта мәктәп, ашхана, магазиндар, йәйге спорт майҙаны, базар булды. Мин ун ике йәшкә тиклем шунда уҡып, 5-се синыфты тамамлауға, һуғыш башланды. Әкренләп шахта ябылды, эшселәр тирә-яҡҡа таралып бөттө. Беҙ әсәй менән хәҙерге Баймаҡ районы Иҫәнбәт ауылына өләсәйҙәргә күсеп киттек.

Сентябрь етеүгә ауылдан 5-6 бала уҡыуға әҙерләнә башланыҡ. Мәктәп ауылдан 3-4 саҡрым Ишберҙе ҡасабаһында ине. Мин Баҡыр-Үҙәктә француз теле өйрәнгәйнем, ә Ишберҙелә немец теле уҡыталар икән, шуға күрә мине 6-сыға алмай, кире 5-се синыфҡа ултырттылар. Ҡар яуғансы йөрөп уҡыныҡ, кейемдәре булмау сәбәпле, күптәр уҡыуҙы ташланы. Һуныраҡ миңә лә уҡыуҙы ташларға тура килде, сөнки әсәйҙе Белоретҡа урман ҡырҡырға алдылар. 5-6 ҡатын декабрь һыуығында бәләкәй саналарға әйберҙәрен һалып, әсирҙәр һымаҡ теҙелешеп сығып киттеләр. Өләсәй менән донъя көтөп ҡалдыҡ. Әсәйҙе оҙатҡандан һуң уҡыу ҡайғыһы бөттө. Көндәр буйы илар инем. Етмәһә, Белоретка киткәндәр араһында үлеүселәр күп, тигән хәбәрҙәр ишетелә. Әсәйҙәр төркөмөнән бер ҡатын ҡасырға самалаған икән, уны шунда уҡ төрмәгә япҡандар. Әсәйем дә берҙән-бер көндө бер апай менән ҡасырға батырсылыҡ иткән. Ике-өс көндән һуң улаҙы тотҡандар. Әсәйем менән ҡасҡан апайҙы 5 йылға төрмәгә ебәрҙеләр. Әсәйемде Баҡыр-Үҙәк ҡасабаһынан иҫәптән төшмәүе ҡотҡарҙы, ни ғәжәптер, уға теймәнеләр.

1942 йыл. Яңы йылда Баймаҡтан бер әхирәте килеп, ҡатыны үлеп ҡалған ағаһына димләп, әсәйемде Баймаҡҡа алып китте. Әсәйем: "Яңғыҙ улымды уҡытыуға ярҙам итһәң, ризамын", - тип ризалашты һәм беҙ Баймаҡҡа күсеп киттек. Мин булған документтарымды алып мәктәпкә киттем. Минән диктант яҙҙырҙылар, "икеле" гә яҙҙым. Мине тағы ла 5-се синыфҡа ултырттылар, етмәһә, бында ла немец теле уҡытыла икән. Шулай итеп, Баймаҡ малайы булып киттем, тик ике ай йәшәгәс, ағайҙы өлкән улы менән фронтҡа оҙаттыҡ. Икеһенән дә бер-ике ай хат алып өлгөрҙөк, ҡара ҡағыҙҙары килеп тә төштө.

Ярай әле ҡалаларҙа аталары фронтҡа киткән ғаиләләрҙең балаларына икмәк бирелә ине. Пекарняла утын етешмәү сәбәпле, ул норма менән бирелгән икмәк сейле-бешле, нәҡ бөгөнгө балалар уйнатҡан пластилин кеүек булыр ине. Шул икмәкте лә көнө буйы сиратҡа тороп алаһың, ҡайһы саҡта етмәй ҙә ҡуя. Булған ғына норманы әләктереп ҡалыу өсөн йә иртә таңдан, йә булмаһа, кистән магазин янына барып, сират алыр инек, сират юғалмаһын өсөн усҡа химик ҡәләм менән номер яҙырҙар ине. Утын булған саҡта икмәк бешерелә, ә булмаһа, онлата бирерҙәр ине. Беҙҙең ғаиләгә икмәк урынына 600 грамм он алыр инек. Ул он иләнмәгән, лыс кәбәк, һоло ҡылсыҡтарынан торор ине.

Әллә кем булып, икмәкте моҡсайға һалып ҡайтып инеүҙәр әле булһа күҙ алдында. Шул икмәкте һөтһөҙ, шәкәрһеҙ сәй менән һемерә һалаһың да дәрескә бештерәһең.



### Совхоз эше һәм салбарһыҙ Хәмит...

Йәйге каникулда балаларҙы колхоз, совхоздарға ярҙамға ебәрә торғайнылар. 1943 йылдың авгусында миңә Йылайыр совхозының Октябрь бүлексәһендә эшләргә тура килде. Бер пар үгеҙ бирҙеләр. Көнө буйы яландан һалам ташыйым. Ашау яғы самалы инде, иртәнсәк икмәк менән сәй, төшкә кәбестә һурпаһы һәм ике ҡыяр. Әллә ни ас та, туҡ та түгелбеҙ. Рига арбаһына һәнәк менән һалам тултырып, килтереп бушатыу - минең эш. Әллә ни ауыр эш түгел, тик бына әсе көндәрҙә үгеҙҙәрҙе йөрөтөүе - ай- һай! Йөрөгәнә килмәһә, ҡәһәрең, ята ла ҡуя, хыт әллә нәмә эшлә, торғоҙоп булмай. Йә булмаһа, кәрәк юлдан бармай, бешә һуғып, йә ҡыяҡ төбөнә, йә һалам өйөмөнә саба. Бындай ваҡытта ағайыраҡ кешеләр үгеҙҙе нығ итеп туҡмап, юлға төшөрөп бирә торғайны. Вагонда йәшәнек, вагон эсендә өлкән ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙар, ә беҙ малай-һалайҙар вагон аҫтындағы һалам өҫтөндә ятабыҙ.

Август бөтөүгә, һәр беребеҙгә 6-шар кило бойҙай, бер аҙ ҡыяр биреп ҡайтарып ебәрҙеләр. Тоғобоҙҙо йөкләп, әллә кем булып, йәйәүләп Баймаҡҡа ҡайтып киттек. Ҡайтып етеүебеҙгә төн ине. Тик әсәйгә тигән күстәнәс ҡыярҙы килтереп еткереп булманы. Аңлайһығыҙҙыр, юл аҙабы... Бойҙайҙы күргәс, әсәйемдең күҙҙәренән йәштәр тәгәрәне. "Бына балаҡайым эшкингән, күпме бойҙай алып ҡайтҡан, вәт маладис", - тип мине маҡтай-маҡтай, йыуындырып, туйындырып йоҡларға һалды. Мин тороуға әсәйем бойҙайҙы ҡул тирмәнендә тартып, икмәк бешереп, ҡурмас ҡыҙҙырып, талҡан эшләп тә ҡуйғайны инде.

### Нужа һүрәт эшләтә...

Бала саҡтан һүрәт яраттым. Төҫлө һүрәт, картина күрһәм, нишләптер, илағы килә торғайны. Ҡағыҙ килеп сыҡһа, һүрәт төшөрөр инем. Беҙҙән ике-өс өй аша Сережалар йәшәне. Ул уҡыуын ташлап, эшләп йөрөй ине. Урамда мине күреп ҡалды ла: "Миҙхәт, бер ағай контораһының тышына вывеска яҙҙырырға кеше эҙләй, ярты түтәрәм икмәк бирә", - ти. Икмәк тигәс, риза булдым. Йүгереп, теге ағайға барҙыҡ. Ағай миңә фронттан алып ҡайтҡан майлы буяуҙарын күрһәтте. Буяуҙар һыҡмалы һауыт эсендә, береһе аҡ, икенсеһе ҡара төҫтә. Буяуҙарҙы, ҡалайҙы алып өйгә йүгерҙем. Тимер ҡалайҙы, ҡылдан бумала эшләп, ҡараға буяным. Ике-өс көн кипте. Хәҙер аҡ буяу менән контораның исемен яҙырға кәрәк. Теге ҡылдан бәләкәс бумала эшләп алдым. Хәрефтәрҙе бармаҡ менән матур итеп тигеҙләнем дә алып барып бирҙем. Ағайым ҡыуанысынан бөтөн икмәк тоттороп ебәрҙе. Был көндө лә өйҙә ҙур байрам булды.

Һүрәт төшөрһәм дә, портрет эшләй белмәй инем. Беҙҙең яҡтың атаҡлы рәссамы, ҡурайсы Моратов Хәким ағай юл ыңғайы беҙгә һуғылып, миңә портреттың нисек эшләнеүен өйрәтеп

*Бына аҡ болоттар аҫҡа төшөп китә лә, өҫтә ҡара болоттар хасил була, шунан тағы аҡ болоттар өҫкә күтәрелә. Әйтерһең дә, бер-береһе менән уйнайҙар. Был күренешкә бер нисә секунд аптырап ҡарап торҙом. Ҡайтып, күргәндәремде әсәйемә һөйләнем. Әсәйем: "Балаҡайым, был хәлде үҙебеҙ генә беләйек, бер кемгә лә һөйләмәй тор", - тип иҫкәртеп ҡуйҙы. Һуғыш башланғансы был серҙе үҙебеҙҙә тоттоҡ. "Һуғыш башланды", - тигән һүҙҙе ишеткәс кенә әсәйем: "Һин, улым, төш кеүек күргән икәнһең аҡ болот менән ҡара болот көрәшеүен, бына бит, ҡәһәр неместәр беҙгә һуғыш башлаған..." - тине.*

✓ *Киләсәктә ғүмерлек юлдашым итеп атайыма оҡшаған, көслө, сая рухлы, ышаныслы, ауыр ваҡыттарҙа арҡаланырлыҡ ир-егетте күрергә теләр инем. Шундай ир-егеттең һинән өстөн булыуы үҙе бер бәхеттер ул.*

китте. Бик ярап ҡалды был эш. Күрше-күләндең фронтта үлгән аталарының, ағаларының портреттарын эшләй башланым. Эшем өсөн йә ҡорот, йә һөт бирәләр.

### Бер ус йыуа фажиғәһе

1943 йылдың яҙында Күсей ауылынан ҡайғылы хәбәр килде. Хәмиҙә еңгәйем ағайым менән өлкән улын фронтҡа оҙатып, өс балаһы менән тороп ҡалғайны. Икенсе улдары ҡырҙа уҡып йөрөй. Ашарға ризыҡ булмағас, еңгәйем 3 йәшлек Ғәшүрәне өйҙә ҡалдырып, 12 йәшлек Әбдрәфиҡ менән Ирәндеккә йыуа йыйырға китә. Бер аҙ йыйып өлгөрәләр, ыраштa яуа башлай. Көслө ел сыға. Кейемдәре һыулана, күшегәләр. Түбән төшөп барғанда Хәмиҙә еңгәй бер таш ышығына ултыра ла: "Улым, минең әллә нишләп хәл бөттө әле. Ултырып, хәл алайыҡ", - ти. Әбдрәфиҡ әсәһен уятып ҡарай, ләкин ул бер ни ҙә өндәшә алмай. Ахырҙа, Әбдрәфиҡ йүгерә-атлай ауылға ҡайтып китә. Энер ҙә төшә. Ҡултығындағы сепрәккә төрөлгән йыуаһын һеңлеһенә ҡалдыра ла, колхоз рәйесенә барып: "Сибәғәт ағай, әсәйем тауҙа ятып ҡалды, алып ҡайтырға берәй ат биреп тор әле", - тип инәлә. "Ҡайҙа һеҙгә ат, өйөгөҙҙән колхозда эшләүселәр юҡ бит", - тип ҡырт кисеп сығарып ебәрә малайҙы колхоз рәйесе. Әбдрәфиҡ илай-илай өйгә ҡайтып, һеңлеһен йоҡларға һала. Иртәнсәк тороп, Ирәндеккә китә. Билдәле таш янына барһа, әсәһе аҡ яулығын битенә ябып, мәңгелеккә йоҡоға талған. Был фажиғә беҙҙең өсөн оло ҡайғы булды. Әбдрәфиҡ Ҡыҙыл районында көтөүсе булып эшкә төшкән, ә Ғәшүрәне балалар йортона оҙатҡандар. Бер ус йыуа фажиғәһе булып күптәрҙең хәтерендә ҡалғандыр был ваҡиға. Ғәшүрә хәҙер Сибай ҡалаһында йәшәй, 70 йәше тулды, хажиә.

### Ҡурмас та ризыҡ…

Һуғыш осоронда хәлле кешеләр ҙә булыуына минең хәҙер ҙә иҫем китә. Өйөбөҙҙә атайҙан ҡалған күп кенә аҫыл әйберҙәрҙе ауыр көндәрҙә аҙыҡҡа алмаштырҙыҡ. Беҙҙә алтын ялатылған ике ишек тотҡаһы йөрөй торғайны. Уны ҡояшҡа ҡуйһаң, йәйғор төҫөн бирә. Шуны бер апай бер булка икмәккә һәм бер киҫәк иткә алмаштырып алып китте. Ошо аҙыҡ менән тағы ла бер нисә көндө алға шылдырҙыҡ.

Сережа күршем Баймаҡтағы үлсәгестәр йүнәтеү мастерскойында эшләй ине, мине лә үҙенең янына эшкә саҡыра башланы. Мин шунда мастер ярҙамсыһы булып эшләй башланым. Тутыҡҡан үлсәгестәрҙе, герҙәрҙе таҙартаһың, призмаларын көйләйһең. Сережа менән мине шул эштәрҙе башҡарыу өсөн Матрай совхозына ебәрҙеләр. Барғас, самандан эшләнгән бер складты мастерской иттеләр. Беҙ шул складта эшләйбеҙ, йәшәйбеҙ, йоҡлайбыҙ. Караuат урынына 500 килолыҡ үлсәүҙе файҙаланабыҙ. Эш өсөн көнөнә 1 кило һоло, йәки һоло ҡатыш бойҙай бирәләр. Хыт нисек итеп аша, бөтә аҙыҡ шул булды. Үлсәгестәрҙең тимер тәрилкәһендә ҡурмас ҡыҙҙырабыҙ ҙа, кеҫәләргә тултырып, ашай-ашай, һыу эсә-эсә эшләй бирәбеҙ. Ҡыҙҙырылған һолоно көнбағыш кеүек сиртеп, телдәр киҫелеп бөттө.

Бер аҙнанан беҙҙе Бүребайға күсерҙеләр. Унда ла таш складта эшләнек. Бында, исмаһам, эшселәр ашханаһы бар икән. Эш хаҡы иҫәбенә шул ашханага тукланабыҙ. Иртәле-кисле үлән сәйе, бер телем икмәк, төшкә бөшмәк ашы, икенсеһенә тоҙланған ҡыяр. Ҡурмасҡа ҡарағанда барыбер һәйбәтерәк. Эшебеҙҙе Өфөнән килгән комиссия ҡараны, яҡшыларына клеймо һуғалар, насарҙарын яңынан эшләргә ҡушалар. Ай буйы эшләнек, ә аҡса юҡ, сөнки хеҙмәт хаҡын ашап бөткәнбеҙ. Ярай әле, Сережа сепаратор төҙәтә белә ине, һауыт-һабаларҙың тишеген ямай, күнәк-тас төпләй. Мине лә шул эштәргә өйрәтеп, әҙерәк ҡоротҡа, майға мандып ҡалдыҡ. Сережаның ҡулы һәр нәмәгә килешеп тороп ине, минә ҙур тормош һабағы бирҙе ул.

### Өҙөлөп көттөк Еңеүҙе…

Беҙ уҡыған мәктәптең залында аэроплан макеты була торғайны. Был моделдең тышы бик матур йәшел материалдан, клеенка кеүек нәк тауарҙан ине. Уны балалар йыртҡылап, тишкеләп бөткәйне. Мин дә унын дәфтәр битендәй бер киҫәген йыртып, янсыҡ тегеп алып, әллә кем булып, эсенә аҡсалар, бер айлыҡ икмәк талондарын һалып йөрөп ятҡан булам. Берҙән-бер көндө теге матур ғына янсығым кеҫәнән төшөп ҡалған бит. Вәт ҡайғы. Хәҙер ай буйы икмәкһеҙ йәшәргә тура киләсәк. Үҙем йөрөгән урындарҙы тетеп эҙләнем, тик табып булманы. "Ярар, балам, яҙмағандыр", - тип кенә йыуатып ҡуйҙы әсәйем. Йыуатыуын йыуатты ла ул, ә нисек йәшәргә? Әсәйҙең алтын-көмөш тәңкәләр менән биҙәлгән селтәренән башҡа аҙыҡҡа алмаштырыр нәмә лә ҡалманы. "Улым кәләш алһа, килемгә булыр", - тип һаҡлай ине әсәйем. Сират шул селтәргә ҡалды. Уҡыуҙан ҡайтҡанда, нишләптер, магазинға инергә булдым. Хоҙай етәкләгәндер. Тупһаға баҫһам, ҡыҙғылт ҡына ҡатырға киҫәге ята, исем фамилияһы ла юҡ. 5 көнгә аҙыҡ ала торған хәрби талон булып сыҡты. Бер нәмә лә уйламай, уны һатыусы Мәҙинә апайға тотторҙом. Ҡайҙан алғанды ла һораманы, һораһа, һуғыштан Рәшит ағай ҡайтҡайны, шул ҡалдырҙы, тип әйтергә әҙерләнгәйнем. Һатыусы минә икмәк, сәй, шәкәр тотторып сығарҙы ла ебәрҙе. Шулай итеп, көндө көнгә ялғап, айҙың яртыһын үткәрҙек, тағы 15 көн ҡалды. Әсәйем тағы ла: "Ярай, балаҡайым, мин селтәрҙе алмаштырам инде, бераҙ менән һөйләштем", - тине лә, күҙ йәштәрен һөртә-һөртә, селтәрҙе алып сығып китте. Бер сәғәттән 5 кило һарыҡ ите алып ҡайтып килде. Шулай итеп, алтын-көмөштән торған ауыр селтәр ҙә беҙҙән китте. Өҙөлөп көткән Еңеүҙе бына шулай саҡ-саҡ үлмәйенсә еткерҙек...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һуғыштан һуң Баймаҡ 1-се һанлы урта мәктәбе башҡорт синыфында уҡыған осорҙа беҙҙең нисек йәшәүҙе, нисек уҡыуҙы аңлап та, "наҙандар, эшкинмәгәндәр, төшөп ҡалғандар" тип әйтеүсе уҡытыусылар ҙа булды. Шул "наҙандар"ҙан Шоңҡаров Әмир - тарих фәндәре кандидаты, Зөфәров Вәлид - отличник, математика уҡытыусыһы, Буранғолов Варис - тарих уҡытыусыһы, Сырлыбаева Билә - рус теле һәм әҙәбиәте уҡыусыһы, Әхмәтшина Зәйнәп - башланғыс синыфтар уҡытыусыһы, мин - химия-биология уҡытыусыһы, танылған рәссам булып, илгә хеҙмәт иттек. Бөтәбеҙ ҙә юғары белем алырға өлгәштек. Ауыр тормоштоң зәхмәте беҙҙе урап үтмәне: Зәйнәп - астманан, Бикә - фажиғәле рәүештә, Әмир - инсульттан, Вәлид менән Варис - инфарктан вафат булдылар. Беҙҙең кластан мин бер үҙем ҡалдым. Әйтергә кәрәк, беҙҙе 5-се синыфтан етәкләгән уҡытыусыбыҙ Шахморатова Айһылыу Ғөбәй ҡыҙына 90 йәш тулып килә, Октябрьский ҡалаһында имен-һау йәшәй, ораштып торабыҙ.**

*Әхмәр ҮТӘБАЙ әҙерләне.*

ШАНДАУ



**"Киске Өфө" гәзитенең һуңғы һандарының береһендә баҫылып сыҡҡан "Ҡалып итексегә лә… үҙебеҙгә лә хуш икән" исемле мәҡәлә (авторы Рәүф Бикташев) берәүҙе лә битараф ҡалдырмағандыр. Авторҙың фекерҙәре, ысынлап та, уйландырырлыҡ.**

# ҠАЛЫПТАН СЫҠМАЙЫҠ,

## ир-егет һәм ҡыҙ-ҡатын ҡалыбынан…

Рәүф Бикташев башҡорт мөхитендә ҡабул ителгән тәрбиә һәм көнкүреш ҡалыптарынан сыҡмауҙы, хәҙерге заманда ла ғаиләләрҙә баланы ата-бабаларыбыҙҙан мираҫҡа ҡалған бороңғо йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәргә таянып тәрбиәләргә кәрәклекте һыҙыҡ өҫтөнә ала. Автор менән килешмәй булмай, сөнки ҡайһы ғына башҡорт йолаһын алһаң да, ул ниндәйҙер ритуалдар сылбыры ғына түгел, ул, иң элек, тәрбиәүи сара. Р. Бикташевтың "Барлыҡ боҙоҡлоҡ - ҡалыптан сығыу һөҙөмтәһе" тигән фекеренә лә айырым-асыҡ миҫалдар килтерергә мөмкин.

Бына, мәҫәлән, башҡорт халҡының туй йолаһы үҙенсәлектәренә генә туҡталыу ҙа етә. Элек ҡайһы бер төбәктәрҙә ҡыҙ ҡушыу йолаһынан һуң еңгәләр йәш ғаиләнең ҡауышыуының, хәҙер инде килен кешенең сафлығын, таҙалығын иҫбатлаусы "дәлил"де башҡаларға күрһәтер булған. "Дәлил" булмаған осраҡта, түшәк бысраҡҡа, дегетҡә буялған.

Хәҙерге заман йәштәре сит ил мәҙәниәте йоғонтоһонда "заманса" йәшәп ҡалырға, үҙҙәрен бер нәмәлә лә сикләмәскә тырыша. Йәштәр араһындағы боҙоҡлоҡ, төрлө йоғошло ауырыуҙарҙың таралыуы, енси бәйһеҙлек, үҫмер ҡыҙҙар араһында аборттар һанының артыуы, ташландыҡ балаларҙың күбәйеүе шул "заманса" йәшәүҙең әсе әҙемтәләре булыуы һәр кемгә билдәле. Минеңсә, хәҙерге заманда ҡыҙҙарҙы тоғро ҡатын, әсә, ил инәһе итеп тәрбиәләүҙә тап электә йолалар кәрәктер ҙә. Бөләкәй саҡтан уҡ ҡыҙ бала йола буйынса ин төп һыуҙы тоторға тейеш буласағын белеп үҫһә, тәртипле, инсафлы булыр, бәләләргә лә тарымаҫ ине.

Башҡорт халҡында тағы ла олоно ололау, кесене кесе итеү йолаһы бар. Был йоланың бер күренеше буларак, ҡунаҡ килгәндә балаларҙы тәртипле булырға өйрәткәндәр. Беҙҙә лә әсәйем ҡунаҡтар булғанда өҫтәлдән нәмәләр һорап "оло бәйелләнеү"ҙән, йә булмаһа, ололар менән ярышып хәбәр һөйләүҙән, уларҙың һөйләшеүенә ҡыҫылып ҡамасаулауҙан һәр ваҡыт тыйҙы. Был тәрбиәһеҙлек, тәртипһеҙлек күрһәткесе, тип өйрәтте.

Мәҡәлә авторы хәҙерге заман ғаиләһендә бала тәрбиәләүҙә атай кешегә, ғөмүмән, ир-егеткә ихтирам һеңдереү зарурлығын айырым билдәләп үтә. Был - бәхәсһеҙ. Ир абруйы ҡатындан тора, тигән һүҙҙәре лә дөрөҫ. Ысынлап та, ир-егет ғаилә башлығы, ғаиләнең яҡлаусыһы булырға тейеш, мөһим ҡарарҙарҙы, бергә кәңәшләшеп ал иткәндән һуң, ул ҡабул итергә тейеш. Тик хәҙерге заманда ошо "ҡалып"ҡа тап килерлек ир-егеттәр бармы икән? Бер ҡайҙа ла эшләмәгән, ҡатынының елкәһендә аҫрау булып ятҡан, иң ҡыҙығы, был хәлде бер нисек тә ыңғай яҡҡа үҙгәртергә теләмәгән ир-егеттәр, йә булмаһа, эскегә һабышҡандар ҙа бар бит әле. Улар үҫеп килгән балаларына абруй, матур "ҡалып" була аламы һуң? Ниндәй "ғаилә башлығы" сыға һуң уларҙан? Юҡ, ир-егеттәрҙе кәмһетергә теләгәндән түгел һүҙем. Р. Бикташевтың "аңһыҙ ҡатындар" тураһындағы фекеренә, ир-егеттәрҙең дә төрлөһө була, тигән яуап ҡына. Ғаиләлә ҡатын-ҡыҙ, автор яҙыуынса, "ышаныслы, һүҙендә тороусан, ҡырыҫ ҡиәфәтле, әммә тәрән кисерешле тәбиғәт балаһы, моңло, ныҡыш, көслө ихтыярлы, күп һөнәрле, бәйләүән кәүҙәле һау-сәләмәт кеше" ҡалыбын ҡуйырға, йәғни балалары алдында ғына түгел, үҙенең мөнәсәбәттәрендә лә атай кешегә ҡарата ихтирам тәрбиәләргә, унын абруйын күтәрергә тейеш булһа, ир-егеттәр шул "ҡалып"ҡа тап килергә тейештәр! Ә былдай "башҡорт батыры"н балала бәләкәйҙән үк тәрбиәләү кәрәктер. Р. Бикташевтың ир-егеттәрҙе өҫтөнлөклө хоҡуҡта тәрбиәләргә кәрәк, тигән фекерен дауам итеп, уларҙы айырым уҡытыуҙы тәҡдим итергә булыр ине. Был ир балаларҙа яуаплылыҡ, берҙәмлек кеүек матур сифаттарҙы тәрбиәләр ине (миҫал: мәктәптә малайҙар дәрес эшләмәй, йә яуап биреүҙән ҡасып, ҡыҙҙарҙың артында боҫоп ултырмаҫ ине).

Ир баланы тыуғас та әсәһе иркәләп, наҙлай, балалар баҡсаһында ла уны тәрбиәсе апай ҡаршы ала, аҙаҡ мәктәптә лә ул күбеһенсә уҡытыусы апайҙар ҡулында тәрбиәләнә. Бөтә синыф менән сәскә һүрәте төшөрөп ултырғанса, ир-егеттәр һөнәренә ҡағылышлы эш менән булһалар, һөҙөмтәләрек булыр ине. Ә ҡыҙҙарға килгәндә, уларҙы, ысынлап та, халҡыбыҙ хәтерендә һаҡланып ҡалған тыйыуҙар нигеҙендә тәрбиәләһәк, зарар итмәҫ ине, тип уйлайым (Ир-егеттең кейемен йыуғыс итергә ярамай, кәмһетеләр; Ир-егеткә һуғырға, тибергә ярамай, ҡулың, аяғың тартышыр һ.б.).

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтергә теләйем: бар ул, бар матур ғаиләләр. Ысын ғаилә башлығы булған ир-егеттәр ҙә бар, ирен хөрмәтләп, ҡәҙерен белгән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа бар, уларҙың һанын арттырырға ғына кәрәк.

Беҙҙең ғаиләлә дүрт ҡыҙ бала тәрбиәләндек. Ситтән ҡарағанда тулы матриархат булырға тейеш булһа ла, ғаиләбеҙҙә атайҙың абруйы ҙур булды. Бәләкәй саҡтан уҡ атай бөтә нәмәне белә, һәр һорауға яуап табыр кеүек тойолһа, хәҙер ҙә ул хәл итә алмаҫтай проблема юҡ кеүек. Ул нисек кенә булмаһын, беҙҙең өсөн бөтәһен дә эшләйәсәк, бар ауырлыҡтарҙы еңәсәк, килеп тыуған һәр проблеманың хәл итеү юлын табасаҡ! Ул беҙҙең өсөн иң көслө кеше! Әлбиттә, беҙҙең бындай ҡарашта булыуыбыҙҙа әсәйҙең дә роле ҙур.

Бәлки, ғаилә мөнәсәбәттәре тураһында яңылышыраҡ та фекер йөрөтәмдер, ни тиһәң дә, үҙ ғаиләм юҡ әлегә, тик барыбер киләсәктә ғүмерлек юлдашым итеп атайыма оҡшаған, көслө, сая рухлы, ышаныслы, ауыр ваҡыттарҙа арҡаланырлыҡ ир-егетте күрергә теләр инем. Шундай ир-егеттең һинән өстөн булыуы үҙе бер бәхеттер ул.

**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

✓ *Ҡараһам, әлеге һалдаттың ҡанға батҡан кәүҙәһе ята, башы юҡ. Тор ҙа йүгер шунан! Взвод командиры ҡысҡырып туҡтатты: "Ложись, красноармеец, ложись!"*

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*



**Атайым, Бәҙретдинов Миңлеәхмәт Бәҙретдин улы, Ҡыйғы районының Иҙрис ауылында тыуып үҫеп, үҙ заманының бар яфаларын да, ҡайғы-шатлыҡтарын да берҙәй татыған, тәбиғәт һәм кешеләр менән аралашыуҙан ләззәт табып йәшәгән заттарҙан ине. Ауыл йәштәре менән спектаклдәр ҡуйып йөрөүен йыш иҫләр ине, ә тәбиғәттән бирелгән моңло тауышын ауылдашы, халыҡ артисы Ғималетдин Минһажев та һоҡланып тыңлар булған. Тәрбиәле һәм уҡымышлы шәхестәрҙе беҙгә өлгө итеп ҡуйҙы, мин белгәндән бирле ауыҙына тамсы ла араҡы алманы. Һүҙгә оҫта булды, ул һөйләгәндәрҙе барыһы ла бик яратып тыңлар ине. Ҡыштың оҙон-оҙаҡ кистәрен төрлө донъя хәлдәре, фәһем алырлыҡ хәл-ваҡиғалар тураһында ихлас әңгәмәләшеп уҙғара инек. Үҙенең эске донъяһын тетрәткән һуғыш хаҡында ла нисек уйлай, шул рәүешле һөйләү-баһалауҙан ҡурҡманы. Еңеү байрамы алдынан атайым бәйән иткәндәрҙең бер килкеһен уның үҙ исеменән, һүҙмә-һүҙ тигәндәй, уҡыусыларыбыҙға тәҡдим итергә баҙнат иттем.**

# ҺУҒЫШ МИНЕ ЯРЛЫҠАНЫ,

## яраланы, әммә үлтермәне...

### Хеҙмәт әрмеһендә үткән тереклек

Һуғыш башланған саҡта колхоз умарталығында эшләп йөрөй инем. Ауылдағы йәш ир-ат береһе артынан береһе һуғышҡа китеп тора. Сират миңә лә етте. Тик мин һуғыш өсөн яраҡһыҙ булып сыҡтым: күҙҙәрем насарыраҡ күреү сәбәпле, Ырымбур өлкәһенә хеҙмәт армияһына ебәрҙеләр. Ашау үтә наҡыҫ: бер-ике телем икмәк тә, шыйыҡ әсе кәбеҫтә ашы. Еүешләнгән кейемдәребеҙҙе киптерер урын юҡ, күптәребеҙ һалҡын тейҙереп, бик ҡаты йүтәлләп тә йөрөй, ә дауа-фәлән тураһында һүҙ ҙә юҡ. Нисек етте шулай, ҡыш үтеп китте. Айҙар буйы ярым ас йәшәү арҡаһында ашарға ярарлыҡ нимә табыла, шуның менән туҡланабыҙ. Бер аҙҙан меңәрләгән кеше ятҡан лагерҙа эпидемия башланды, дарыу-фәлән булмағас, сирлеләр күпләп үлә. Һәр иртә землянкаларҙан үлеләрҙе йыйып алып, арбаға тейәп ебәрәләр. Ошо яман сирҙән мин дә ҡотола алманым, ауыҙға тәғәм ризыҡ ҡабып булмай, инде тора алмам, тип ятам. Бергә йөрөгән яҡын иптәшем ярҙам ҡулын һуҙмаһа, моғайын, мин дә тере ҡалмаҫ инем. Ул һәр төрлө эшкә оҫта бер зат ине. Ҡайҙандыр ҡурғаш табып, иретеп, шунан аш ҡалаҡтары ҡойоп, ризыҡҡа алмаштыра торғайны. Был юлы ул әбейҙәрҙән ниндәйҙер үләндәр алып ҡайтып, шуларҙы ҡайнатып, миңә эсерҙе. Ябығып, ҡаҡ һөйәккә ҡалғанлыҡтан, барыбер эшкә яраҡһыҙ, тип табып, мине ҡайтарып ебәрҙеләр.

### Бал ҡортон күргәс, фашисты күрмәй ҡалмам

Һуғыш ваҡыты булһа ла, ауылда һөт-ҡатыҡ етерлек булғас, тиҙ һауыҡтым. 1942 йыл, ҡыҙыу ураҡ мәле етте. Миңә район хәрби комиссариатынан тағы ла повестка килде. Медицина комиссияһы тикшереүе тамамланғас, ҡайтанан хеҙмәт армияһына ебәрергә ҡарар иттеләр. Комиссия рәйесенән (ул район дауаханаһы хирургы ине) ошо һүҙҙе ишетеү менән: "Ни эшләтһәгеҙ, шулай итегеҙ, әммә башҡаса хеҙмәт армияһына барасағым юҡ", - тим. Ҡаршылашҡас, хәрби трибунал менән янайҙар. Ә мин: "Хеҙмәт армияһында бер файҙаһыҙға йән биргәнсе, һуғышта үлеүең меңартыҡ, үҙ теләгем менән фронтҡа ебәрегеҙ!" - тип даулашам. Комиссия ағзалары шымып ҡалды. "Һинең күҙҙәрең һәйбәт күрмәгәс, ни рәүешле һуғышҡа яраҡлы, тип яҙайыҡ", - ти әлеге хирург. "Бынағайыш, умарталыҡта ваҡ ҡына бал ҡортон күргәнде, уҫлаптай дошманды ни эшләп күрмәй, ти", - тип яуаплайым. Шул саҡта комиссия рәйесе, йылмая биреп, уң ҡулын күтәрҙе лә, бармаҡтарын тырпайтып: "Йә, улайһа, иптәш Бәҙретдинов, һанап ҡарағыҙ әле, нисә бармаҡ күрәһегеҙ?" - тип, миңә өндәште. "Биш", - тип әйтә һалдым. Шулай итеп, минең фамилиямды ла фронтҡа алыныусылар исемлегенә яҙып ҡуйҙылар.

### Алкин алҡымдан алды

Туған-тыумаса, ғаиләм менән хушлашыр көн дә етте. Күңел төбөндә һағыш, ни тиһәң дә, һуғышҡа китәбеҙ бит, әйләнеп ҡайтыуҙары икеле. Хәләлем Маһисәрүәр ҙә бирешмәҫкә тырыша, күҙ йәштәрен күрһәтмәй: боронғо йола буйынса ирҙәрен яуға оҙатҡан ҡатын-ҡыҙға бер генә бөртөк күҙ йәшен дә ергә тамыҙмау хәйерле. Ике генә йәшендә булған Мәүлизәмде күтәреп алып, үптем дә, һуғыш яланына илтәсәк сәфәргә аяҡ баҫтым.

Башҡортостандың төрлө район-ҡалаларынан йыйылған беҙҙең һымаҡ егеттәрҙе һәм беҙҙән байтаҡҡа олораҡ йәштә булған ҡыҙылармеецтарҙы Алкин лагеренда һуғышҡа әҙерләйҙәр ине. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, мин был әҙерлектең ни өсөн тап ошо рәүешле башҡарылғанын ул саҡта ла, аҙаҡ та төшөнә алманым. Алкин лагеренда уҙғарылған ай ярымлап ваҡыт үҙе бер мәхшәр кеүек хәтергә һеңеп ҡалған. Башҡа милләт кешеләре нисек кисергәндер, ә башҡорт һәм татар егеттәренә айырыуса ауыр булды. Эш беҙҙең русса насарыраҡ һөйләшеүебеҙҙә генә булмағандыр. Баштан уҡ өйрәтеүсе командирҙар үҙҙәрен уғата тупаҫ тотто, ғәйебе булһа-булмаһа ла, ябай һалдатҡа ҡарата яман итеп һүгенеү, кәмһетеү, төрлөсә мәсхәрә итеүҙәр баштан ашты. Физик әҙерлек менән бергә атыу оҫталығына, һуғыш алымдарына өйрәтерҙәр, тип уйлай инек, тик һуңғыһына иғтибар иткән кеше булманы. Мәҫәлән, командирҙарыбыҙ беҙҙе көнө-төнө стройҙа йөрөтөү менән аяҡтан йығылғансы ыҙалар булды. Иң мөһиме, стройҙа атлап барғанда штыгың һелкенмәҫкә тейеш! Командир алдынан атлап уҙғанда был ҡағиҙә үтәлмәй икән, ул арт һаныңа тибеп ебәреүҙе бер нигә лә һанамай. Беҙ, бына-бына фронтҡа, үлемесле яу ҡырына барасаҡ йәш һалдаттар, һис аңлай алмайбыҙ: һуғышта стройҙа йөрөүҙең ни кәрәге бар икән? Бер өҙлөкһөҙ кәмһетелеүгә дусар булған һалдат һуғыш яланына ниндәй уйҙар, ниндәй кисерештәр менән барып инер һуң?

Үтә ямғырлы бер көндө киң һәм тәрән траншея аша һалынған йоморо бүрәнә буйлап тиҙ генә йүгереп сығыу буйынса күнекмә башланды. Беҙҙең взводта Ҡыйғы районының Абҙай ауылынан өлкәнерәк йәштәге бер һалдат бар ине. Ул күнекмәләрҙе йәштәр кеүек етеҙ һәм тейешле кимәлдә үтәй алмағас, айырыуса йыш туҡмала ине. Был юлы ла ул тайғаҡ бүрәнәнән яртылаш һыу тулған траншеяға бер нисә ҡат рәттән йығылып төштө. Сығырынан сыҡҡан командир уны шинель яғаһынан тартып сығарып, ярһып-ажғырынып типкесләй башланы. Ошо бахырҙың түҙемлегенең бер сиге булғандыр инде: кинәт кенә әйләнеп, үҙен ыҙалаған командирҙың яңағына килтереп һалмаһынмы! Күҙе аҡайған офицер: "Пристрелю гада!" - тип, һүгенә-һүгенә кобураһынан пистолетын ҡапшай башланы. Иҫенә килгән һалдаттар командирҙың ҡулына аҫылынды. Хәрби дисциплинаны боҙған һалдатты ҡулға алып, ябып ҡуйҙылар. Эш хәтәр: уны йә строй алдында атыу, йә штрафбат көтә. Күнегеү-занятиелар туҡталды, казармала өнһөҙ-тынһыҙ ултырабыҙ. Әммә уҡымышлыраҡ һәм зирәгерәк һалдаттарҙың береһе бер ғәйепһеҙ кешене нисек итеп ҡотҡарыу тураһында һүҙ башланы. Уны барыһы ла хуплап сыҡты. Тиҙ арала йыйылышып, лагерь командованиеһына рапорт яҙып, әлеге һалдаттың рәхимһеҙ командирҙан ҡаты туҡмалыуы хаҡында белдерҙек. Рапортта ошо офицерҙы беҙҙең менән командалыҡ итеүҙән алыуҙы ла үтендек. Бер кем дә үҙ имзаһын һалыуҙан баш тартманы. Күп йылдар үтһә лә, ошо ваҡиғаны тетрәнеп иҫкә алам: был үҙенә күрә бунтҡа тиң ваҡиға булған бит. Күрәһең, ил өсөн йәнен бирергә әҙер булған кешенең үҙен ҡолдарса тоторға теләмәүе сағылғандыр һуғыш осороноң ошо бер мәлендә. Бәхеткә күрә, конфликт беҙҙең файҙаға хәл ителде: өлкән йәштәге һалдатты яҙаламанылар, беҙгә итәғәтле һәм уҡымышлы заттан булған яңы командир тәғәйенләнде.

### Һуғышта ла әхлаҡ-имандан яҙмау хәйерле

Ерҙәр туңып, ҡырпаҡ ҡар яуа башлаған көндәрҙең береһендә беҙҙең яңы ғына ойошторолған хәрби часыбыҙҙы ла тауар поезының вагон-теплушкаларына тейәп, фронтҡа оҙаттылар.

Фронтҡа етергә байтаҡ ҡына ара ҡалғас, беҙҙе алып килгән хәрби эшелон кире боролдо, ә беҙ йәйәүле марш менән ары ҡуҙғалдыҡ. Юлыбыҙҙа бөтөнләйгә янып бөткән, йәиһә яртылаш яндырылған ауылдар осрай башланы. Шундай шомло һәм ҡот оскос күренеш ул: йорттар ғына түгел, ихаталарҙағы бар нәмә янып бөткән, тик рәт-рәт булып теҙелеп киткән мейестәрҙең ялҡындан ҡарайған мөрйәләре һерәйешеп тора.

Шулай бер ауыл өйөндә ҡунырға тура килде. Һалдат тоғондағы "сухой паек" менән тамаҡ ялғарға булдыҡ. Мейес башынан ныҡ ябығыуҙан нәҙек кенә булып ҡалған муйындарын һона биреп, кесе йәштәге бала-саға беҙгә мөлдөрәп ҡарап ята, әммә бер ни ҙә һорамай. Ҡапҡан ризығыма төйөлгәндәй булдым: шул ас балаларҙың күҙ алдында нисек ашап ултырмаҡ кәрәк. Тоғомда ниҙәр бар, барыһын да шул меҫкендәргә таратып бирҙем. Икенсе көндө ары киттек, ярты көндән ашыу барғас, ялға туҡтаттылар. Барыһы ла тамаҡ ялғай, минең ашарлыҡ нәмәм юҡ. Шул саҡта бер һалдат взвод командирына минең ни өсөн ризыҡланмай ултырыуым хаҡында ошаҡлай ҙа һалды. Лейтенант һалдаттарҙы стройға теҙеп ҡуйҙы ла, мине строй алдына сығарып баҫтырҙы. Әллә ни эшләп, ҡурҡып та киттем. "Красноармейцу, рядовому Бадретдинову объявляю благодарность за достойное отношение к голодающему населению!" - тип әйтте лә командирыбыҙ үҙенең офицер паегының бер өлөшөн миңә бирҙе. Һуғыш заманы тәртиптәре ҡаты булһа ла, кеше күңелен аңлаған командирҙар ябай һалдатҡа өлгө булды.

### Беҙ күргәнде башҡалар күрмәһен

Беҙҙең хәрби часть Старая Русса ҡалаһы тарафында һуғышҡа инде. Ул саҡта бында дошман менән аяуһыҙ ҡаты бәрелештәр бара ине. Урманлы-һаҙлыҡлы ерҙәр, окоп ҡаҙып булмай тиерлек, шундуҡ һыу сыға башлай. Башлыса асыҡ ерҙә түгел, ағас араһында ятабыҙ. Беҙ урынлашҡан урманда имгәнмәгән ағас күренмәй тиерлек: мина-снаряд тейеүҙән уларҙың баштары сәрпәкләнеп, өҙөлөп төшөп бөткән. Шулай бер көндө командирыбыҙ күрһәткән ориентирға төҙәп, урман ситендәге ағастар араһынан һирәк-һаяҡ атыштырып ятабыҙ. Шул саҡта немецтар беҙҙең позицияны миномет утына тота башланы. Миналар алда ла, артта ла төшөп ярыла, баш күтәргеһеҙ. Төбөнән үк аҡтарылып йығылған ҡарағайҙың баш яғына һыйындым, ә төп артында Стәрлетамаҡ ҡалаһынан таныш урыҫ һалдаты ята. Ул, ваҡыты-ваҡыты менән башын күтәрә биреп, мине үҙ янына саҡыра: бергә күңеллерәк булыр, йәнәһе. Инде уның янына күсеп ятырға ҡуҙғалдым ғына тигәндә, янда ғына ҡаты шартлау яңғыраны. Ҡараһам, әлеге һалдаттың ҡанға батҡан кәүҙәһе ята, башы юҡ. Тор ҙа йүгер шунан! Взвод командиры ҡысҡырып туҡтатты: "Ложись, красноармеец, ложись!"

Һуғышта, бигерәк тә алғы һыҙыҡта, хатта бер генә көн дауамында иҫән ҡалыуың үҙе бер ғәжәп хәл кеүек тойола ине. Үлем һәр сәғәттә, һәр минутта яныбыҙҙан йыраҡ китмәне. Бер көндө беҙҙән алдараҡ күренеп ятҡан ҡалҡыулыҡҡа табан ҡуҙғалырға бойороҡ булды. Винтовкаларыбыҙҙы алға һона биреп, йүгерәатлай барабыҙ. Кемдеңдер мине исемләп саҡырыуын ишетеп ҡалдым. Абайлабыраҡ ҡараһам, ҡар өҫтөндә күрше Ләүзә ауылы урыҫы ята, бик ҡаты яраланған. Яраһын бәйләргә уйлаһам да, килеп сыҡманы: командирҙың "Вперед!" тигән бойороғона буйһонмайса булмай бит. Шул урыҫтың: "Не оставляйте меня, лучше пристрелите!" - тип асырғаланып ҡысҡырып ятып ҡалыуын әле лә онота алмайым. Аҙаҡтан уның мәрйәһе ауылыбыҙға килеп, ире тураһында һорашып та йөрөнө.

Һуғышта күргән-кисергәндең барыһы тураһында һөйләп бөтөрлөк түгел. Ошо ҡәһәрле ҡырылыштан, туҡтауһыҙ кеше йәнен онтап торған мәхшәрҙән нисек иҫән сығыуымды аңлатып та булмай. 1942 йылдың 3 декабренә ҡаршы таңға табан дошман окоптары алдындағы сәнскеле тимер сыбыҡты киҫеп таҙартырға ебәрелгән 80 һалдаттың бер нисәһе генә иҫән ҡалғандыр, тим. Бер юлы снаряд ярсығынан һәм дошман пуляһынан ауыр яра алып, ҡар өҫтөндә ҡанһырап ятҡан еремдән санитарҙар алып сыҡмаһа, Бөйөк Еңеүҙән һуңғы ауыр, әммә үҙенә күрә бәхетле тормошто мин дә күрә алмаҫ инем.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ хәтер яңыртты.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# АТАҢ-ӘСӘҢ ТЕЛЕН...

## башҡа телдәрҙән өҫтөн күр

*(Көндәлектән өҙөктәр)*

**Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, Рәсәй Федерацияһының 1-се класлы юстиция советнигы Дәминдәр Рамаҙан улы Хәмитов һуғыштан һуң Бөтә Союз юридик институтын тамамлай, төрлө урындарҙа судья булып эшләй, 1962 йылдан 1987 йылға тиклем БАССР-ҙың Юғары суд ағзаһы булып тора. 80-90-сы йылдарҙан алып ғүмеренең аҙағынаса Дәминдәр Хәмитов 20-50-се йылдарҙағы сәйәси репрессиялар хаҡындағы документтарҙы өйрәнә. Уның золом ҡорбандары хаҡында "Был хаҡта яҙыуы ауыр, яҙмайынса ла ярамай..." тигән мәҡәләһен гәзит уҡыусыларға тәҡдим иткәйнек инде. Быларҙын тыш, Дәминдәр Хәмитовтың архив материалдарына, шулай уҡ ревизия мәғлүмәттәрен өйрәнеүгә бәйле бик күп һандағы яҙмалары, көндәлектәре, шиғри әҫәрҙәре һаҡлана. Түбәндә беҙ һеҙгә уларҙан бер нисә өҙөк тәҡдим итәбеҙ. Әйтергә кәрәк, был яҙмаларҙа ғәҙеллек өсөн янған шәхестең, тәжрибәле юристың, судьяның граждандыҡ позицияһы ла, милли рухы ла ярылып ята. Уларҙы гәзитебеҙҙә баҫыуға улы Ратмир Хәмитов әҙерләне.**

### Балаһыҙҙар - тере үлек...

Ғафури паркына барҙыҡ. Һыра эстек тә, ундағы уйындарҙы ҡарап йөрөгәндән һуң "Генералы песчаных карьеров" тигән фильм ҡараныҡ. Кешеләрҙең тормоштоң насарлығын белеүе йәшәргә ҡамасаулай, тигән фекергә килдем фильмды ҡарағас. Фильм оҡшаманы. Әҙәпһеҙлекте, яланғас кешеләрҙе, енси яҡынлыҡ ҡылыуҙы артыҡ аңлайышлы итеп күрһәтәләр. Былдай фильмдар йәштәрҙе боҙа ғына.

**7 июль, 1974 йыл.**

...Ике сәғәт буйы урамда йөрөнөк. Көн эҫе, бик насар йоҡланыҡ. Тәҙрәне япһаң, тын алып булмай. Асһаң, урамдағы тауыш йоҡларға бирмәй. Ҡасан кешеләрсә тыныс ҡына йортта йәшәп, туйғансы ял итергә яҙыр инде. Фатирҙы алмаштырыу мәсьәләһен ҡуҙғатырға кәрәк.

**9 июль, 1974 йыл.**

Көн болотло. Ямғыр яуҙы. Магазиндарға йөрөйөм. Күнел чемоданный. Брежневтар хат яҙған. Тағы ла һуғыштың ауыр йылдары иҫкә төшөп, йөрәкте әрнетте. Һуғыш яланында үлгән ҡаһармандар күҙ алдына килде. Хоҙайбирҙин Зиннур, Мягков Василий, һ.б.

**14 июль, 1974 йыл.**

Иртә менән һыуыҡ булһа ла, көн ҡояшлы. Күнел дә күтәренке. Ноғман Мусиндың "Ғүмерҙең бер мәле" тигән повесын уҡый башланым. Йәшлек иҫкә төштө, ғүмер көҙөндә йәшлек йылдарына анализ яһала, күҙ алдына ҡайны бер эпизодтар килә, әйтерһең дә, йәшлегең әле генә булған кеүек. Әллә ниндәй хистәр уяна. Шулай ҙа миңә ваҡытлыса булһа ла урталай өҙөләп ялғанған арҡанды хәтерләткән тормошто онотоорға мөмкинлек бирә китап уҡыу. Китап, фәҡәт китап уҡыу донъяға ике күҙ менән ҙур итеп ҡарарға, ғүмерҙең йәмен аңларға ярҙам итә. Был инде ғүмеремдең тауынан төшөп барған тиҙлекте кәметә төшә. Крик душы. Кешеләр ни өсөн үҙҙәрен генә ярата икән. Нишләп үҙҙәренә ҡарата эшләгән изгелекте онотalар? Нинә ошо уҡ ҡасандыр үҙҙәренә ярҙам иткән кешеләр кәрәк саҡта һинең турала хәстәрлек күрмәй? Әллә тормош шарттары үҙенән-үҙе быларҙың барыһын да оноторға мәжбүр итәме икән?

**22 август, 1974 йыл.**

З.Ш-ҡа 50 йәш. Хәбәр итмәне. Күрәһең, дәрәжә тигән нәмә беҙҙең кеүек түбәндә. Шуға ла бик "түбәндә" йәшәгән туғандары уның менән бергә был түңәрәк датаны билдәләргә ҡамасаулай торғандыр. Дамир "дүртле" билдәһе алған. Уның вуҙға инеү мәсьәләһе шулай хәл ителеүе бик мөмкин.

**23 август, 1974 йыл.**

Шишәмбе. Көн ҡояшлы. Донъя яҡтыраҡ тойолдо, сөнки бөгөн кинйә тыуҙы. Тағы ла малай.

**12 февраль, 1975 йыл.**

Малай үҫә. Ратмир тип исем ҡуштыҡ. Әҙерәк илап та ала. Көн ҡояшлы, бер аҙ ҡар яуҙы. Яҙ булырға уйламай әле.

**3 март, 1975 йыл.**

Һыу һипмәһән, үлән ҡорор,<br>
Ғәмһеҙ үҙен йәнһеҙ тойор.<br>
Балаһыҙҙар - тере үлек,<br>
Тормошта йәшәмәгән кеүек.

**7 март, 1975 йыл.**

Кесәҙнә. Нервылар тағы ла ҡаҡшаны. Нинә мин шулай эш өсөн үләм икән? Нинә шул ҡәҙәре дөрөҫлөктө яҡларға? Мин бер үҙем нимә эшләй алам һуң? Былдай ысулдар менән барғанда 1937 йылдарҙағы кеүек теләгән бер кешене төрмәгә ултыртырға була түгелме һуң?

### Ратмир улыма изге теләктәрем

Улым, һин бер йылдан балиғ булаһың, үҙаллы юлға баҫаһың. Талабым шул: ата-әсәндең күнелен тап. Уларҙы яҡшы эшең, арыу һүҙең менән ҡәҙер ит. Насар кешеләргә эйәрмә, улар менән берүк аралашма. Яҡшыларҙан фәһем ал, уларҙың изге һүҙҙәрен тыңла. Үҙеңдән өлкәндәрҙең дә, кеселәрҙең дә һүҙҙәренә ҡолаҡ һал. Уларҙы иғтибар менән тыңлап, әйткәндәрен ергә ташлама. Һөйкөмлө һәм кесе бәйелле бул. Һис кемгә дошманлыҡ һәм яманлыҡ эшләмә, соҡор ҡаҙма, ул соҡорға үҙең төшөрһөң.

Үҙеңде рәнйеткәндәргә, урынһыҙға кәмһеткәндәргә булған асыуыңды кисер, һине яҡын күреп, һиңә һырынып барғандарға рәхимле бул. Үҙең бөрәр кешене уҫал уй йәки яңылышлыҡ менән рәнйетһәң, уның менән татыулаш, бәхиллек һора. Кешенекенә теймә, үҙеңдеке аҙмы-күпме булһа ла, ҡәнәғәт бул. Әсе телле булма, уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә.

Йүнсел бул, тырышып эшлә. Күп йоҡлама, аҙ йоҡла, күп йоҡлау ул ялҡауҙарға ғына хас. Бер ваҡытта ла эреләнмә, һауаланма. Һәр саҡ дөрөҫлөктә бул. Ялған һөйләмә. Кешелекле, кеселекле бул. Кенә ҡыума, эсендә хаслыҡ йөрөтмә, юҡҡа-барға янма, көймә. Тормош булғас, хаталар ҙа, хафалар ҙа, бәлә-ҡазалар ҙа булыр, Аллаһы Тәғәләнән былдай күренештәрҙең һуңғыһы булыуын һора. Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте кин, ул һине ярлыҡар, теләгең ҡабул булыр.

Һаулығың алтын, уны күҙ ҡараң кеүек һаҡла. Хәтереңдә тот: байлыҡ - бер айлыҡ, ә һаулыҡ - ғүмерлек, уны һатып алып булмай. Ваҡыт - аҡҡан һыу, кирегә аҡмай, уны бушҡа уҙҙырма. Ғәйбәт һөйләмә, себендән фил яһама. Ҡырыҫ булмаҫҡа тырыш, бер кемгә лә тупаҫлыҡ күрһәтмә.

Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел. Ҡырын эш ҡылма, ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленер. Башлаған эшең изге булһа, уны эшләп бөтөрмәйенсә тынма. Шарап менән дуҫлашма, уны артыҡ яратһаң, ғүмереңде ҡыҫҡартырһың, яҡты донъя менән йәйәш көйө хушлашырһың. Белмәү гәйеп түгел, белер өсөн уҡы, өйрән. Ир кешегә йөҙ һөнәр ҙә аҙ.



Бәхетле бул, ә бәхетте тешең-тырнағың менән генә тырышып табып була. Һаҡ бул, бәлә-ҡаза аяҡ аҫтында ятыр. Хаҡлыҡ, сафлыҡ, әҙәплелек рухи байлыҡ, кешелек өлгөһө. Һөйөү-һөйөлөү, мөхәббәт тигән төшөнсә - тормош көҙгөһө. Уны ватма, мөхәббәтеңә хыянат итмә, тоғро булып ҡал.

Үҙ телеңдә һөйләш, уны онотма. Теле барҙың - иле бар, теле, йөрәгендә халҡы булмағандың кеше булырға ла хаҡы юҡ, тигән Рәми Ғарипов. Атаәсәң телен, улар йәшәгән төйәкте башҡа телдәрҙән, башҡа ерҙәрҙән артыҡ күр.

Ошо изге теләктәремде һәр саҡ иҫеңдә тотһаң, тормошоңда ҡулланһаң, бик һәйбәт кеше булырһың. Башҡалар үҙеңдән фәһем алыр, ғүмер юлдарың соҡор-саҡыр, бормалы булһа ла, барыуы еңел булыр. Тормошоң ал да гөл булмаһа ла, ауыр булмаҫ.

*Атайың.*<br>
*12 февраль, 1992 йыл.*

ҺУҒЫШТЫ КУРАЛМАЙЫМ...

# АТАЙ, ҠАЙТ!



**Атайым Әбүзәров Ғәлимйән Мөхәмәтйән улы 1941 йылдың 2 июлендә 36 йәшендә Бөйөк Ватан һуғышына саҡырылып, дүрт йыл һуғышҡандан һуң, Еңеүгә дүрт айҙан күберәк ваҡыт ҡалғас ҡына хәбәрһеҙ юғалды.**

Бына йәйге оҙон көн үтеп тә бара, кис яҡынлаша. Баш өҫтөндә ҡайнар нурҙарын һибеп арыған ҡояш байыуға табан бара. Баҡһаң, Бибинур баҫыуҙа япа-яңғыҙы тороп ҡалған, ураҡсы ҡатындар ҡайтышып бөткән икән. Ул эстән генә: "Яланда бер үҙем ҡалыуым мөһим түгел, ураҡты бөгөн бөтөрөүем бик һәйбәт булды әле", - тип, сикһеҙ шатланып, шулай уҡ ҡайтырға әҙерләнде. Тирә-яғынан аҡ үлән менән эт эсәген йолҡоп алып, икеһен бергә борғолаһы ла, шул бау менән урағының тештәрен ураП, яурынына һалып, ҡайтырға сыҡты. Ул ныҡ талсыҡҡайны. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, уға сикһеҙ рәхәт ине, хатта бая һына балтырҙарын ярып бөткән ҡаты бойҙай ҡамылдары ла әле уның яланғас аяҡтарына йомшаҡ ҡына бәрелеп, ҡытыҡлайҙар. Бына ул юл ситенә боролоп, бер нисә бойҙай башағын ерҙән алды ла, уларҙы устарында ыуып, көбөгән тыны менән өрөп, тос бойҙай йөҙрәләрен ауыҙына ҡабып, рәхәтләнеп сәйнәй-сәйнәй ҡайтыу яғына ыңғайланы.

Килә торғас, уйҙар тулҡынына сорналғанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Бала саҡтарын да, үҫмер йылдарын да, Ғәлимен дә иҫенә төшөрҙө. Был ҡәһәрле һуғыш бөтә изге хыялдарҙы селпәрәмә килтереп, юҡҡа сығарҙы. Ауылдан һыу һөлөгө кеүек бик күп ир-егеттәр алынды бит һуғышҡа. Шунлыҡтан, бөтә ауыр эш ҡатын-ҡыҙ, бала-саға иңенә төштө. Ауыр эшкә түҙеп була, яңғыҙлыҡҡа, һөйгән кешеңдең һинең менән йәнәшә булмауына йөрәк өҙгөләнә. Әлдә бер үҙе түгел. Әхирәттәре, туғандары, ауылдаштары, күҙ нурылай күргән ике уланы бар. Шулар ғына уға йәшәү көсө бирә.

Бәй, нишләп уйҙарына бирелеп, аҡрынлап килә һуң әле ул? Өйҙә улдары көтә лә баһа, асығып-һыуһап бөткәндәрҙер инде бәләкәстәрем. Аҙымдарын йышайтты Бибинур. Ул ҡайтып еткәндә, ишек алды тып-тын, балалалары ла күренмәй ине. Ашығып, ишек тотҡаһына үрелгәйне, эстән бәләкәй улының иламһыраған тауышын ишетеп, йөрәге жыу итеп ҡалды: "Атай-й-й-й! Ҡайт инде. Бөгөн ҡайт, хәҙер ҡайт, кискә!.. Атай, ат менән ҡайт, кәмә менән ҡайт! Атай ҡайт!.. Мин һине бик һағындым, һине бик яратам. Атай-й-й!.."

**Флүрә ИҪӘНҒОЛОВА.**<br>
**Өфө ҡалаһы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛАҢ ОҘАҠ ИЛАМАҺЫН...

## мейеһенә зыян килер

■ Фисташка сәтләүеген күптәр үҙенсәлекле тәме өсөн үҙ итә. Был сәтләүек йөрәкте күп сирҙәрҙән дә һаҡлай икән. Джорд Мейсон университеты кардиологтары белдереүенсә, фисташка организмда "насар" холестерин бүленеп сығыуын тотҡарлай, шулай уҡ йөрәктең ишемик ауыруыы барлыҡҡа килеүен 9 процентҡа түбәнәйтә. Табиптар көн һайын был сәтләүек ашаған кешеләрҙә тикшергәндән һуң уларҙың организмында холестерин кимәле 12 процентҡа түбәнәйеүен асыҡлаған.

■ Иммунитетты төрлө юлдар менән күтәрергә була. Британия Колумбияһы университеты иммунологтары ауырыуҙарҙан һаҡланыуҙың ябай, әммә бик үҙенсәлекле ысулын тәҡдим итә. Табиптар фекеренсә, бының өсөн ауырыу кешеләрҙең фотографияларына ҡарау ҙа етә. Бындай "сеанс"тан һуң организмдың һаҡланыу функциялары 22 процентҡа күтәрелеүе иҫбат ителгән.

■ Олоғайған һайын кешене йоҡоһоҙлоҡ борсой башлай. Израилдең Хайф университеты ғалимдары был проблеманы хәл итеү өсөн көн режимын боҙмаҫҡа кәңәш итә. Әгәр ҙә йоҡлар алдынан душ инергә ғәҙәтләнеп тә, был тәртипте боҙһағыҙ, мотлаҡ йоҡлай алмай интегәсәкһегеҙ, ти улар.

■ Көн һайын ашханала туҡланып йөрөү организм өсөн зарарлы, тип иҫкәртә Лондон университеты ғалимдары. Оло кеше өсөн көндәлек тоҙ дозаһы 6 грамдан артмаҫҡа тейеш, ә ҡайһы бер ашханаларҙа уның күләмен ике тапҡырға арттырып һалалар. Ғалимдар 500-ҙән ашыу кафе һәм ашхананы тикшергәндән һуң, бер тәрилкә ашта тоҙҙоң бер ҡап чипсыға ҡарағанда 99 процентҡа күберәк булыуы асыҡланған. Тоҙҙо артыҡ ҡулланыу ҡан тамырҙарына кире йоғонто яһай һәм һөҙөмтәлә йөрәк ауырыуҙарына килтереүе ихтимал. Тикшеренеүселәр аҙыҡ-түлеккә иғтибарлыраҡ булырға һәм йышыраҡ өйҙә ашарға тәҡдим итә.

■ Британия психологы Пенелопа Лич фекеренсә, оҙаҡ илау бала мейеһе үҫешенә кире йоғонто яһай. Daily Mail материалдары буйынса, был теория балаға көнөнә 20 минут иларға ярай, тигән фекергә ҡаршы килә. Күп белгестәр атаәсәләргә сабыйҙарына иларға мөмкинлек биреп, уларҙы тынысландырырға ашыҡмаҫҡа кәңәш итә. Ә психолог Пенелопа Лич әйтеүенсә, бала психологик яҡтан өлгөрөп етмәгән шәхес һәм ул кемдеңдер ярҙамына мохтаж булған өсөн илай. Оҙайлы ваҡыт илау һөҙөмтәһендә күп күләмдә кортизол - стресс гормоны бүленеп сыға һәм бала мейеһенә кире йоғонто яһай.

■ Күптән түгел ғалимдар йәшел сәйҙең тағы ла бер үҙенсәлеген асыҡлаған. Ҡытайҙың Гонконг университеты офтальмологтары иҫбатлауынса, йәшел сәй составында булған матдәләр глаукома һәм башҡа күҙ ауырыуҙарын булдырмаҫҡа ярҙам итә. Эсемлектә булған катехиндар тәьҫире 20 сәғәткә тиклем һүҙыла икән.

■ Артыҡ ауырлыҡ йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы һәм диабет сирҙәренә килтерә. Күптән түгел Австралия ғалимдары артыҡ ауырлыҡтың кешенең иммун системаһына ла кире йоғонто яһауын асыҡлаған. CyberSecurity материалдарына ҡарағанда, иммун системаһы төрлө күҙәнәктәрҙән тора. Кеше сәләмәт булһын өсөн, был күҙәнәктәр бер үк нисбәттә булырға тейеш. Быға төрлө факторҙар, шул иҫәптән туҡланыу рәүеше лә йоғонто яһай. Артыҡ май ҡатламы булеп сығарыуға мәжбүр иткән күҙәнәктәр кире йоғонтоға эйә һәм ул ҡан менән бөтә организмға таралып, уны ауырыта башлай.

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП

**Ҡатмарлы, бәрелешле, ығы-зығылы, шау-шыулы заманда йәшәйбеҙ. Тартыштар, тауыштар оҙаҡҡа һуҙылһа, халыҡтар яҙмышын, киләсәген хәл иткән иң изге һәм мөҡәддәс хәл-ваҡиғалар ҙа төҫһөҙләнә, хатта онотола башлай. Бөйөк Ватан һуғышы, халыҡ ҡаһарманлығы, миллиондар ҡаны менән яуланған Еңеү йылдың бер көнлөк хәтирәһе һәм тантанаһы ғына булып ҡуймағайы. Ә бындай хәүефкә урын бар. Бер нисә йылдар үтеүгә был алыштың тере шаһиттарын бармаҡ менән һанап сығып буласаҡ. Ана шуға ла ятып ҡалған ҡаһармандарҙың хаттарын, иҫән ҡайтҡан ветерандарҙың иҫтәлектәрен һәр быуын кешеләренең күңелдәренә еткереү мөһим, ғәзиз һәм ҡәҙерле эштәрҙең береһе булырға тейеш. Улар бит һуғыш хаҡындағы иң дөрөҫ документтар, иң ышанысլы шаһиттар!**

# АҒАЙЫМ ХАТТАРЫ...

## һалдат аманаты булып йәшәй



Минең архивымда ла ана шундай аманаттар - Бөйөк Ватан һуғышында 1943 йылда һәләк булған оло ағайым Фәтхрахман Мифтаховтың өс тиҫтәнән ашыу һалдат хаттары һаҡлана. "Өскөл хаттар" тип исемләнгән тәүге шиғырҙар йыйынтығынан алып, ошо көнгәсә иждадымда уның поэтик образы сағыла килһә лә, хат аманаттарын баҫтырыу-күрһәтеүгә, нисектер, ваҡыт та етмәй, форсат та булмай ҡуя. Ғәфү итмәҫлек вайымһыҙлыҡ, әлбиттә. Быйыл Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығын билдәләгәндә уларҙың бер нисәүһен генә булһа ла, " Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына еткереүҙе мотлаҡ башҡарырға тейешле бурысым итеп күрәм. Тәүҙә ағайым биографияһына ҡағылышлы бер нисә һүҙ.

Мифтахов Фәтхрахман Фәйзрахман улы 1923 йылдың 14 ноябрендә Ишембай районы Кинйәбулат ауылында тыуа. 1942 йылдың башында хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, урта белемле, бөтә йәһәттән әҙерлекле егетте ярты айлыҡ радистдесант курсына ебәрәләр. Уҡып бөтөрөүгә бер айҙан да әҙ ҡалғанда, 1942 йылдың февралендә, Мәскәүгә немецтар яҡынлашҡас, ағайымды шунда оҙаталар. Бында иҫән-һау ҡалғас, ике менләгән һалдатты дошман тылына ташлайҙар. Фашистар был операцияны алдан беләләр. Ҡаты алыш башлана...

Ә хәҙер хаттарға күсәйек. Уларҙың күбеһе әсәйемә, унан атайыма (ул да хәрби хеҙмәттә ине- Р. М.), ҡайһы берҙәре Мәғҙән ағайыма, Ғәмбәрә апайыма, ә бер нисәүһе беҙгә - Нафиҡ менән Риф ҡустыларына - адресланған. Бына тәүге хат. Хәйер, тәүге лә булмағандыр, сөнки был хат башына "өс" һаны яҙып ҡуйылған бит. Тәүгеләре, күрәһең, юғалғандар.

"Ҡәҙерле әсәйем! Һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ кеүек итеп тәрбиәләп үҫтергән оло улың, боец Фәтхрахмандан сикһеҙ күп ҡайнар, һағынышлы сәләм. Туғандарыма, туған-ырыуҙарыма, дуҫтарыма - шул уҡ һағынышлы сәләм! Сәләм һуңында бөтәгеҙгә лә матур тормош, сәләмәтлек теләйем.

Әсәй! Мин бик матур урында йәшәйем. Ашау бик яҡшы. Кейендерҙеләр. Атайымды оҙаҡламай күрәм, тип торам. Шунда иҫке кейемде алмашып бирәм инде. 24 мартта Баймөхәмәт ағайҙарҙы күрҙем. Эшләгән ерҙән Нәфисә апайҙы күреп: "Апай!" - тип ҡысҡырғайным, илап ебәрҙе. Хәҙер көн дә күреп һөйләшеп торам. Һеҙгә сәләм яҙырға ҡушты. Ашауҙары яҡшы икән. Әсәй! Минең өсөн ҡайғырмағыҙ, сөнки хур булырлыҡ егет итеп тәрбиәләмәнегеҙ. Мин штабта ла, хәрби комитетта ла бюро члены булып эшләйем. Минең ваҡытым юҡ, һеҙ күп итеп яҙығыҙ. Һыйыр быҙауланымы? Пособие алаһығыҙмы? Ашарығыҙға бармы? Әтебеҙ Пальма иҫәнме? Ауылда ниндәй үҙгәрештәр бар? Атайымдан хат алаһығыҙмы? Минән ниндәй ярҙам кәрәк? Бөтәһен дә хатҡа яҙығыҙ...

Сәләм менән улың - Фәтхрахман".

"Мәғҙән туғаным! Хаттарҙың бөтәһен дә бар делоға тегеп бар. Атайымдыҡын да. Киләсәктә кәрәк булыр... Бик күп китап уҡы, белгәнеңде яҙ, рәсем төшөр. Тормоштоң ҡәҙерен белеп йәшә. Уйнап-көл. Күп эшлә. Әсәйемә бер ҡаршы һүҙ әйтмәй хеҙмәт ит, һүҙен тыңла. Ул һине лә кеше итеп тәрбиәләр. Мине ул ошолай кеше араһында авторитетлы егет итеп үҫтерҙе.

Ағайың - Фәтхрахман, 10 апрель 1942 йыл".

Оло ағайым мәктәптә тик яҡшы билдәләренә генә уҡый. Ул үҙенең ошо ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә колхозда комсомол секретары, хатта бригадир булып эшләргә лә өлгөрә. Үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәгендә ҡатнаша, шиғырҙар иждад итеү менән бергә, пьесалар ҙа яҙа. Уларҙың ҡайһы берҙәрен ауыл сәхнәләрендә ҡуйып йөрөүҙәрен тиңдәштәре йыш хәтерләй торғайны.

Фәтхрахман ағайымдың һаҡланып ҡалған шиғырҙары күп түгел. Төрлө ҡағыҙға - дәфтәр биттәренә, фотокарточкалар артына яҙылған тиҫтәгә яҡын шиғырҙар - беҙҙең өсөн иң ҡәҙерле ҡомартҡылар булды, буласаҡ. Бына шуларҙың береһе. "Әсәйемә" тип исемләнгән шиғыр аҫтында "23 июль 1942 йыл" датаһы тора.

### Әсәйемә

Ҡәҙерле әсәм минең,
Һинең алда бына ант итәм:
Намыҫым менән,
Комсомолдың ғорур исеме менән,
Һүҙҙәреңде һинең аҡларға,
Ватанымдың тыныслығын, бәхетен
Һуңғы һулышҡаса яҡларға.
Ошо изге юлда йәш ғүмерҙе
Ҡара ергә илтеп һалһам да,
Даным ҡайтыр минең
көнбайыштан -
Еңеп ҡайтҡан ҡыҙыл байраҡта.
Унда минең изге саф ҡаным
Ҡояш нуры кеүек балҡып торор,
Еңеү байрамында
Һеҙҙең менән бергә пир ҡорор...

Ағайымдың ҡайһы хатын ғына асып уҡыма, уларҙың һәр береһендә, исемдәрен һанап әйткән сәләм-теләктәренән тыш, бөтәбеҙ өсөн дә борсолоу, хәстәрлек, һәр ҡайһыһында еңеүгә ҙур һәм сикһеҙ ышаныс бар. Бына уның 1942 йылдың 15 майында беҙгә - ҡустыларына адресланған хаты:

"Нафиҡ, Риф туғандарым!

Иртәнсәк ҡәкүк тауыштарын ишетһәгеҙ, ошо хат аша ебәргән күп сәләмдән дә күп матур сәләмдәр килтергән абзыйымдан тип тыңлағыҙ.

Мин яҡшы йәшәйем. Иптәштәрем күп. Тик һеҙҙең кеүек туғандарым, әсәйем генә юҡ. Винтовкам да бар. Оҙаҡламай ҡәһәр һуҡҡыры Гитлерҙы туҡмайым да һеҙҙең янға өйгә ҡайтам. Мин ҡайтҡас, күмәкләп Тәйрүктә һыу инербеҙ. Балыҡ тоторбоҙ. Шамилды ла алып барырбыҙ. (Шамил минең ҡустым ине, һуғыш ваҡытында вафат булып ҡуйҙ, - Р. М.).

Ҡур ағайығыҙ Фәтхрахман".

Фәтхрахман ағайым 1943 йылдың 5 сентябрендә Мәғҙән ағайыма хат ебәрә. Был уның беҙ алған һуңғы хәбәре булып сыға:

"Мәғҙән туғаным! Мин һинең 21 августа яҙған хатыңды 1 сентябрҙә алып уҡыным. Бик шатландым, сөнки 1 Майҙа ғына һинән бер хат алғайным. Шунан бирле хат алғаным булманы.

Бер аҙнала ғына ун бер мәртәбә күктән һикерҙем. Егерме сәғәттән артыҡ күктә остом. Ул еңел түгел бит. Мин летчиклыҡҡа уҡыған кеше лә түгел... Үҙем дә аптырайым һаулыҡҡа. Кеше бер һикереүҙә ике килограмға кәмей, ә мин бер айға һигеҙ йөҙ грамм ғына кәменем. Бер аҙнала бер килограмға арттым. Шулай ҙа бик йонсоторҙо. Бер һикергәндә арҡалағы тоғом төшөп юғалды. Беләк сәғәтен сисеп шунда һалғайным...

Ҡышҡа ашау ягын ҡайғыртығыҙ.

Хушығыҙ..."

Ошо хаттан һуң, оҙаҡ та үтмәй булһа кәрәк, беҙҙең өйгә ҡағыҙ килтерҙеләр. Мин уны төш һымаҡ ҡына хәтерләйем. "Ҡара ҡағыҙ" тигәндәре шул булғандыр инде. Уны беҙгә әсәй бер ваҡытта ла күрһәткәне булманы. Беҙ был "кош теле"ндәй ҡағыҙға яҙылған хәбәрҙең ни тиклем фажиғә килтереүен әсәйгә ҡарап күрә инек. Ләкин ул уға ышанманы. Һуғышта яңылышыуҙарҙың булыуына, ағайымдың ҡайтыуына ышанып, ошо өмөтөн ғүмеренең һуңғы сигенәсә һүндермәне. Беҙ ҙә шул өмөт менән йәшәнек. 1985 йылда "Ағай хаттары" исемле шиғырымды яҙғайным. Уны композитор Мөфтәдин Ғиләжев йырға ла һалды. Ул "Атай хаттары" исеме менән башҡарыла. Икеһе лә дөрөҫ: һуғыш бөрөүҙәрҙең атаһын, икенселәрҙең - иң ҡәҙерле кешеләренең ғүмерҙәрен өҙҙө.

Ғәзиз әсәй, балам уҡыр, тиеп,
Аҡ аманат итеп һаҡланы.
Әсәйемдең ҡайнар йәше тамған
Әле лә иҫән ағай хаттары.

**Риф МИФТАХОВ.**

ШАҢДАУ

**Гәзиттең 16-сы һанында Әмир Ғүмәровтың "Салауат Юлаев" ниңә еңелде…" тип аталған мәҡәләһен уҡығандан һуң, был темаға ҡарата үҙемдең фекеремде белдерергә булдым.**

# БАШҠОРТ ХОККЕЙЫ БАР,

## уны күрә һәм күрһәтә белеү фарыз…



Һуңғы йылдарҙа хоккейға иғтибар бермә-бер артты, быны Рәсәй йыйылма командаһының донъя чемпионатында ике йыл рәттән еңеү яулауы, континенталь хоккей лигаһының барлыҡҡа килеүе менән аңлаталар. "Салауат Юлаев" хоккей командаһына ҡарата ла шул уҡты әйтергә була. Бөгөн күптәр тик команданың еңелеүе тураһында ғына һөйләй, сәбәптәрен эҙләй. Шул уҡ ваҡытта команданың өсөнсө урынды яулауын бик иҫәпкә алмайҙар. Әлбиттә, алдына ҙур маҡсаттар ҡуйған көслө команда өсөн был ҙур ҡаҙаныш та түгелдер, шулай ҙа "Салауат Юлаев" хоккей командаһының турнир таблицаһының иң аҫҡы баҫҡыстарында йөрөгән, плей-офф уйындарына әлегә лә алмаған ваҡыттарҙы иҫкә алғанда, былтырғы миҙгел менән сағыштырғанда, был да насар түгел.

Регуляр чемпионаттың еңеүсеһе булған команданың плей-офф уйындарында аҙаҡҡаса барып етә алмауын авторҙың "парадокс" тип атауы менән килешмәйем. Регуляр чемпионатта еңеү плей-офта мотлаҡ рәүештә кубок яулау тигәнде аңлатмай һәм гарантия ла бирмәй. Команда миҙгел дауамында һәйбәт һөҙөмтәләр күрһәткәнгә күрә лә плей-офф уйындарында, бәлки, иң яҡшы формала булмайҙыр. Өҫтәүенә, миҙгел осоронда Евротур уйындары, быйыл Олимпиада уйындары ваҡытында башҡа командалар ял итеп, көс йыйһа, күнекмәләр үткәрһә, беҙҙең күп уйынсылар Рәсәй йыйылма командаһы составында уйнай. Хәл иткес уйындарға әҙер булмауына килгәндә, унда ла күп сәбәптәр табырға, һылтауҙар килтерергә була, әлбиттә. Шулай ҙа КХЛ-дың көнсығыш конференцияһы финалында Салауат Юлаев"ты "Аҡ барс" менән насар уйнаны тип тә әйтеп булмай. Быны хоккей белгестәре лә таный. "Салауат Юлаев" командаһын еңеү күп командалар өсөн ҙур ҡаҙаныш булып тора әле ул.

Авторҙың һығымталарына ҡарата шуларҙы әйтергә була:

- мин уйынсылар, профессиональ спортсылар, уйындар тиҙерәк бөткән һайын яҡшыраҡ, тиҙерәк ял итергә кәрәк, тип уйлағандарҙыр, тип иҫәпләмәйем. Уңдай кәйеф менән "Нефтехимик" командаһынан еңелеп, тағы ла алдараҡ миҙгелде тамамларға булыр ине. Аҡса, еңеү өсөн гонорар мәсьәләһенә килгәндә, Гагарин кубогы өсөн бит премиялар бик юғары, уны Континент кубогы менән сағыштырып булмай;

- Ирек Зариповтағы сәмдең бер мыҫҡалы ғына булһа ине беҙҙең юлаевсыларҙа, тип әйтеү бигүк дөрөҫ түгелдер, минеңсә. Дөрөҫөрәге, улайтып әйтеү түгел, ә Ирек Зарипов менән сағыштырыу урынһыҙ. Физик мөмкинселектәре сикләнгән кешеләрҙә сәм, үҙеңдең ниммәгәләр һәләтле булыуыңды иҫбат итеү теләге һау кешеләргә ҡарағанда күпкә көслөрәк. Уларҙың аңы, психологияһы бөтөнләй икенсе төрлө. "Салауат Юлаев" уйынсыларына килгәндә, уларҙың күбеһе донъя чемпиондары, Стэнли кубогын яулаусылар ҙа бар. Хоккей - команда уйыны, бөтә уйынсыларҙа ла берҙәй сәм уятып, алға әйҙәү тренерҙарҙан да тора.

- "Салауат Юлаев" хоккей командаһының даны бер ҡайҙа ла булмаған да, юғалмаған да. Киреһенсә, йылдан-йыл ул күтәрелеш кисерә. Үҙебеҙҙең тренерҙарҙың, уйынсыларҙың ҡытлығын хоккей клубы етәкселегенең командаһын бөгөн үҡ, хәҙер үк еңеү көтөүе менән аңлатып булалыр, моғайын. Йәштәр хоккей лигаһының барлыҡҡа килеүе хәлде яҡшыға үҙгәртер, тип ышанайыҡ. Ғөмүмән, был ситуация бер беҙҙә генә түгел, башҡа командаларҙа ла күҙәтелә.

Ә Салауат рухын командаға нисек ҡайтарырға һуң? Командала ябай рух ҡына түгел, ә тап Салауат рухы булыуы кәмгә кәрәк? Иң тәү сиратта, милли батыры Салауат булған халыҡ өсөн. Сәм, еңеүгә ынтылышты үҙ эсенә алған батыр рухы ғына түгел, ә тап милли батыр рухы булһын ине ул.

Хоккей донъяһында "Салауат Юлаев" хоккей командаһына иғтибар ҙур ул. Уның тураһында күп яҙалар, күп һөйләйҙәр, тапшырыуҙар ойошторалар. Команданың күптәнге көйәрмәне булараҡ, "Салауат Юлаев"ҡа ҡағылышлы бөтә ваҡиғаларҙы ла күҙәтеп барам. Тик башҡортса сыҡҡан гәзит-журналдарҙа ғына тренер йәки уйынсылар менән шул баҫмаларҙың журналистары алған интервью, әңгәмәләр уҡығаным юҡ. "Йәшлек" гәзитендә күләмле генә мәҡәләләр баҫыла, "Шоңҡар" журналында күренгеләй, тик шуныһы бар - улар икенсе баҫмаларҙан күсереп яҙа.

"Башҡортостан", "Киске Өфө" гәзиттәрендә бөгөн шул-шул командалар уйнаны, шайбаны фәлән уйынсы индерҙе, иҫәп шунса, һ.б. шуның кеүек ҡоро мәғлүмәттәр генә бирелә. Яңылыҡтар кешеләргә минутында барып еткән хәҙерге заманда был мәғлүмәттәр гәзит уҡыусыға ҡыҙыҡ та түгел, Урал арьяғы районданына газеталарҙың һуңлап килеүен иҫәпкә алғанда, бигерәк тә. Мәсәлән, "Киске Өфө" гәзитен беҙ шишәмбе көнө генә алабыҙ. Журналистарға "Салауат Юлаев" хоккей командаһы уйынсылары һәм тренерҙары менән аралашыу өсөн мөмкинлектәр етерлектер, тип уйлайым. Ғөмүмән алғанда, башҡорт телендә сыҡҡан матбуғат баҫмаларында спорт темаһы тейешенсә яҡтыртылмай, ҡоро ҡыҫҡа мәғлүмәттәр, яңылыҡтарға ғына ҡайтып ҡала күбеһенсә. Спортсының Башҡортостандыҡы икәнен, йәки Башҡортостан командаһы өсөн сығыш яһауын һыҙыҡ аҫтына алып, ниндәй урыҫ журналисы милли рухта һорау бирһен, шуның менән уны башҡорт командаһыныҡы икәне тураһында аҙ ғына булһа уйланырға мәжбүр итһен инде.

Шул уҡ Ирек Зариповты алайыҡ, нимә белдек беҙ быға тиклем уның хаҡында? Ванкуверҙағы ҙур еңеүҙәренә тиклем дә уның ҡаҙаныштары юҡ түгел. Ныҡлы әҙерлек, йылдар дауамында ҡатнашҡан ярыштар тәжрибәһе, яҡшы һөҙөмтәләр булмаһа, бөгөнгө еңеүҙәр ҙә булмаҫ ине. Бына ул ниндәй шәп спортсы, беҙҙең башҡорт егете, тип әйтер өсөн, яҙыр өсөн, мотлаҡ рәүештә олимпия уйындарының дүрт алтын һәм бер көмөш миҙалын яулау кәрәктер, моғайын. Хатта бер ниндәй еңеүгә өлгәшмәгән хәлдә лә, үҙендә көс табып, спортҡа килеүе генә лә үҙе бер батырлыҡ. Беҙҙекеләр уның тураһында яҙып сыҡҡансы, татар журналистары Ирек Зарипов - Башҡортостанда йәшәүсе татар егете, тип донъяға яр һалырға ла өлгөрҙө.

Хоккейға әйләнеп ҡайтҡанда, минең ҡайһы бер таныштар, бигерәк тә яңы танышҡан саҡтарҙа, "Салауат Юлаев"тың көйәрмәне икәнен белгәс, "Эй, шулар өсөн боләть иткән булаһың, командала берәй башҡорт бармы исмаһам?" тип әйтәләр. Бында эш командала башҡорт бармы-юҡмы икәнендә түгел, ә команданың Башҡортостандыҡы булыуында. Мәсәлән, уйынсыларҙың формаһы башҡорт флагы төҫтәрендә, ҡурай эмблемаһы бар, матч башланыр алдынан Башҡортостан Республикаһы гимны яңғырай. Иң көслө командаларҙың береһе булған "Салауат Юлаев" хоккей командаһының уйындарын хоккей менән ҡыҙыҡһынған бөтә кешеләр, икенсе командаларҙың көйәрмәндәре лә ҡарай. "Россия" каналы комментаторҙарының береһе Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры Сергей Гимаев уйынға комментарий биргән саҡта команданың уйыны тураһында ғына һөйләп ҡалмай, гел Башҡортостан хаҡында ла әйтеп үтә. Тамашасыларҙы күрһәткән ваҡытта, матчҡа башҡорт хоккейы ветерандары килгән, шулар-шулар ултыра, һәр ваҡыттағыса, төп көйәрмән Рәхимов та урынында, тип тә билдәләп үтә. Башҡортостандағы спорт үҫеше хаҡында бөтә Рәсәйгә һөйләй. "Салауат Юлаев" плей-офф уйындарынан төшөп ҡалғандан һуңғы тапшырыуҙарҙа ла "Кто бы что ни говорил, все равно я считаю "Салават Юлаев" самой мощной и сильной командой", тип үҙ фекерен белдерҙе.

Интернетта көйәрмәндәрҙең "Благодаря вам я узнала, кто такой Салават Юлаев", "Благодаря вам я горжусь, что живу в Башкортостане" тип яҙыуҙары, көйәрмәндәрҙең сайтында Салауат Юлаев тураһында ентекле мәғлүмәт бирелеүе, уның шиғырҙары урын алыуы ла күп нәмә тураһында һөйләй.

Быларҙы нимәгә теҙеп яҙам? Милли үҙаңды уятыу, башҡа халыҡтар алдында башҡорт милләтен танытыу эшен "Салауат Юлаев" хоккей командаһы аша ла алып бара алыу мөмкинлеген бөтә тулылығында файҙаланырға ине, тип әйтергә теләүем. Һәм был эштә матбуғаттың, журналистар һүҙенең әһәмиәте бик ҙур.

**Әлиә ӘХМӘТОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Проблеманан өҫтөн бул

Проблеманы күреп, уны асыҡлап, аҙаҡ уға зарлана башлаған һәм һуңғы сиктә уның бер өлөшөнә әүерелгән кешеләр була. Шулай уҡ был проблемаға ҡарау менән уны хәл итеү юлдарын эҙләй башлағандар ҙа бар. Проблеманың бер өлөшөнә әйләнгәндәр өсөн тормош - ҡатмарлы көрәш. Әгәр һин унан сығыу юлдарын эҙләгәндәрҙән булһаң, тормош һиңә үҫеү өсөн әллә күпме мөмкинлек бирәсәк. "Һин йә проблеманың өлөшө, йә уны хәл итеүҙең өлөшө була алаһың" - барыһы ла һинең ҡулыңда.

Проблеманың бер өлөшөнә әйләнеү күпкә еңелерәк. Һәр кем үҙенең иғтибарын төрлө факторҙарға һәм мөмкин булған бөтә хәлваҡиғаларға йүнәлтеп, теге йәки был әйберҙең килеп сыҡмаһағына әллә күпме сәбәп таба ала. Ә бына аңыңды проблеманы хәл итерҙәй юлдарҙы эҙләп табырға мәжбүр итеү күпкә ауырыраҡ. Проблемаға күнгәндәргә йырып сыға алмаҫтай ҡаршылыҡ булған әйбер уны хәл итергә тырышҡандар өсөн үҫешкә яҡшы мөмкинлек булып әүерелә.

Төнөн урман юлы буйлап китеп барған ике юлсы тураһында боронғо риүәйәт йәшәй. Күтмәгәндә улар ҙур соҡорға төшөп китә, ә унан өҫтән берәйһе ярҙам итмәйенсә сығып булмай икән. Был көтөлмәгән ҡазаға осраған юлсының береһе, бер ниндәй ҙә сара күрмәйенсә, илаулап тик ултыра, ти. Икенсеһе шундуҡ ҡотолоу юлы эҙләй башлай. Ҡараңғыла һәрмәнә торғас, уның ҡулы соҡорҙоң бер яҡ стенаһында һәленеп торған оҙон ағас тамырына ҡағыла. Был юлсы тиҙ генә соҡорҙан сыға ла үҙенең бешмәгән иптәшенә лә ярҙам ҡулын һона.

Алдында торған ҡаршылыҡ соҡорға йығылыу кеүек экстремаль булмаһа ла, уны еңеү өсөн ҡабул иткән ҡарарың әлеге мәлдә һәм киләсәктә лә уңыш менән уңышһыҙлыҡ араһындағы айырманы билдәләйәсәк. Ҡайһы берҙә һиңә ғәйбәт таратыуҙа ҡатнашыу мөмкинлеге сығыуы ихтимал. Һин ниндәйҙер бер хеҙмәткәргә яла яғыусыларға ҡушыла алаһың. Ә бәлки, һиңә бүтәндәр шулай иткән өсөн генә бер төркөм сәйәсәтенә буйһонмау ылыҡтырыр тойолалыр? Шулай һәр осраҡта һин йә проблеманың, йә уның хәл ителешенең бер өлөшө була алаһың. Һинең һайлау юлың шулай киләсәгеңә ҙур йоғонто яһай ала.

Һин проблеманың бөр өлөшө булып торғанда уны күпертеп, хәл итеп булмаҫтай хәлгә еткерәһен. Ниндәй генә осраҡта ла аңлы рәүештә тырышлыҡ һалыу - проблеманы хәл итеүгә йүнәлткән кешенең башҡаларҙан айырылып тороу һыҙаты. Проблеманы ғына күреп тороу өсөн бер ниндәй ҙә ҡыйыулыҡ, даһилыҡ йәки ҙур тырышлыҡ һалыу кәрәкмәй. Ә бына уны хәл итергә ынтылған кешегә әүрелеү үҙеңә ҡарата ихтирам тойорға һәм һәләттәреңә ышанырға мәжбүр итәсәк. Был шулай уҡ бүтәндәрҙең дә һиңә ҡарата һоҡланыу тойғоһон тыуҙырасаҡ. Улар һине һөҙөмтәләргә нисек өлгәшеп була икәнен белгән кеше буларак баһалаясаҡ. Проблеманы ынғай хәл итеү юлдарын күреп, һин хатта уларҙы үҙеңдең ҡаҙаныштарыңдың кимәлен күтәреүгә илһамландыра алаһың. Ә инде проблеманы хәл итергә ҡарар иткән бер нисә кеше бергә осраша икән, уларҙың нимәгә һәләтле булыуына һоҡланырға ғына ҡала.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



✓"Башҡортостан" телерадиокомпанияһы базаһында былтырҙан башлап "Ҡурай" музыкаль каналы эшләй башланы. Иң матур һәм популяр йырҙар хәҙер тәүлек әйләнәһенә "Башинформсвязь", "Уфанет", "Кристалл" кабель селтәрҙәрендә яңғырай. Канал башҡорт халҡының музыка мираҫы, милли-мәҙәни традициялары һәм сәнғәте менән таныштырыуҙы төп бурысы итеп алған. "Ҡурай" каналында төрлө фәнни-популяр, уҡыу, документаль һәм нәфис фильмдарҙы, сериалдарҙы тәржемә итеү буйынса дубляж бүлеге лә эшләй. Быйыл йыл башынан "Ҡурай" каналы 19 ил менән хеҙмәттәшлек итеп, донъяны төрки халыҡтары сәнғәте менән таныштырыусы Төрөк музыка берекмәһе менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөнө.

## 10 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 Мультфильм
06.20 "Дачная поездка сержанта Цыбули". Комедия
07.40 "Служу Отчизне!"
08.10 "Маршал Баграмян. Любовь на линии огня"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости
10.10 "Пока все дома"
11.10 "Счастье есть!"
12.00 Новости
12.20 "Фазенда"
